ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Июль



Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!

# ШУЛАЙ БУЛҺЫН, ТИНЕ ҠОРҘАШТАР...

## Башҡорт халҡы йыйындары тарихынан



2010 йылдың 10-12 июнендә Өфөлә Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары королтайы үтте. Унда төрлө илдәрҙән, Рәсәй төбәктәренән һәм Башҡортостандан 851 делегат ҡатнашты. Форум эше 11 тематик секция буйынса ойошторолоп, Ҡоролтай депутаттары мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, демография, бөгөнгө йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙың тотҡан урыны, ер мәсьәләләре, эшҡыуарлыҡ, конституцион мөнәсәбәттәр һәм федерализм үҫеше, тел һәм башҡорт халҡының рухи традициялары, милли матбуғат, шулай уҡ сит илдә йәшәүсе башҡорттар яҙмышы проблемаларын тикшерҙе. Был сара сиктәрендә үткән Беренсе йәштәр ҡоролтайында республика ҡала һәм райондарынан, Рәсәй төбәктәренән, сит илдәрҙән 710 делегат ҡатнашты.

Беренсе Бөтә донъя башҡорттары королтайы 1995 йылдың 1-2 июнендә үтә. Унда 800 самаһы делегат һәм ҡунаҡ ҡатнаша. Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы 2002 йылдың 13 – 16 июнендә уҙғарыла. Был форумға 708 делегат килә.

Республика йылы 1990 2010 Год Республики

Тарихҡа тәрәнерәк күҙ һалһаҡ, Беренсе Дөйөм башҡорт ҡоролтайы 1917 йылдың 20-27 июнендә Ырымбурҙа уҙғарыла. Быға тиклем 18-се быуаттың тәүге яртыһында уҡ, батша тарафынан башҡорттарҙың дөйөм ҡоролтайҙары тыйылып ҡуйылған була. Шул уҡ йылдың 25-29 августында Өфөлә икенсе Башҡорт ҡоролтайы үтә.Өсөнсө ҡоролтай 1917 йылдың 8 декабрендә Ырымбурҙа уҙа. Унда 223 делегат ҡатнашлығында Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан 15 ноябрҙә иғлан ителгән Башҡортостан автономияһы раҫлана.

Боронғараҡҡа ҡарағанда, башҡорттарҙың ил алдында торған үтә мөһим мәсьәләләрҙе күмәкләп йыйылып, уртаға һалып тикшереп хәл итеү йолаһы күптәнән килеүен күрергә була. Мәҫәлән, Рус дәүләтенә ҡушылыр алдынан да Ете ырыу берләшмәһе был хаҡта уртаҡ йыйында ҡарар итә. Ырыуҙар биләмәләренең сиктәре лә дөйөм йыйындарҙа килешеп билдәләнә.

# ҠУРАЙ ТАРТА ҠЫҘҘАР...

Йылдағыса Октябрьский ҡалаһында үткән республика Ҡурай байрамында быйыл 230-ҙан ашыу ҡурайсы ҡатнашты. Иң бәләкәсе Өфөнән туғыҙ йәшлек Кристина Лазарева ине. 16 йәштән кесе ҡурайсылар араһында шулай уҡ Өфөнән Арыҫлан Оморҙаҡов беренсе урынды алды. Байрамда ҡатнашыусы ансамблдәр араһынан Дәүләкәндән "Берғаҙан", Туймазынан "Хазина", Баймаҡтан "Йәнгүҙәй" төркөмдәре еңеүсе булдылар. Ә өлкәндәр араһында гран-приға Сибай ҡалаһынан Нурғәли Кейекбирҙин лайыҡ булды.


"Берғаҙан" ансамбле


Кристина Лазареваны билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов ҡотлай.

# УРАЛ БАТЫР РУХЫ АСЛЫКҮЛДӘ



Дәүләкәндә, Асылыкүл буйында урынлашҡан «Тәбиғәт дуҫы» балалар лагеры базаһында «Урал-батыр» эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһе үтте. 12-се тапҡыр рәттән үткән был сәсәндәр бәйгеһе күренекле драматург, сәсән, ғалим-фольклорсы Мөхәмәтша Буранғолдоң ҡобайырҙы тәүге тапҡыр яҙып алыуына 100 йыл тулыуға һәм Айҙар Байыҡ сәсәндең тыуыуының 300 йыллығына арналғайны. Ярыш республикабыҙҙың төрлө район-ҡалаларынан 250 кеше һәм 57 команданы тупланы.

Конкурстың I турында эпосты яңғыҙ башҡарыусылар көс һынашты: 5-се синыфҡа тиклемге уҡыусылар кәмендә – 1000, ә 6-11-сы синыф уҡыусылары – эпостың тулы вариантынан кәмендә 2800 юл ятларға тейеш булды. Жюри ағзалары эпосты башҡарыусыларға баһаны күләм буйынса ғына бирмәне, шулай уҡ эпос тексын тамашасыға еткерә белеү оҫталығы, тасуири уҡый белеү, тауыштың көсө кеүек сифаттар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы.



II турҙа балалар билдәле сәсәндәребеҙ Байыҡ Айҙар, Хәмит Әлмөхәмәтов, Ғәбит Арғынбаев, Мөхәмәтшә Буранғоловтың тормош юлдары, ижадына бәйле викторина булды.

Һуңғы – III турҙа бәйгелә ҡатнашыусылар «Урал батыр» эпосынан йәки башҡа эпик әҫәрҙәрҙән өҙөктәрҙе сәхнәләштерҙе. Гран-приға Ишембай ҡалаһының Зәки Вәлиди исемендәге 2-се гимназияһының 10-сы синыф уҡыусыһы Рәсилә Хисмәтуллина лайыҡ булды **(һүрәттә уны Башҡортостан мәғариф министры урынбаҫары Атрур Сури ҡотлай)**.

## Изге ҡурай

Башҡортостан ерҙәрендә
Өҙҙәреп уйнай ҡурай.
Кешеләр ҙә, йәнлектәр ҙә
Яратып уны тыңлай.

Шатлыҡ-һағыштарын һалып,
Моңло көй көйләп ала.
Бар ерҙе хайран ҡалдырып,
Күңелдәргә моң һала.

Башҡорттарҙың бай тарихын
Шул көйҙә көйләй кәүек,
Тыуған ерҙәрҙә йәшәгән
Яҙмышын һөйләй кәүек.

Башҡорттар яуға сапһа ла,
Ҡурайҡайҙы алғандар.
Дошмандарҙы улар еңгәс,
Ҡурай тартып ҡайтҡандар.

**Эльвина ҠЫЯМОВА,**
**Асҡын районының**
**Ҡарткиҫәк мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

## Шишмә

Урталайға тауҙы ярып,
Аға һалҡын шишмә.
Һыуы бигерәк тәмле,
Һыуһағанда килешә.

Ҡоштар ҙа унан
Рәхәтләнеп һыу эсә.
Беҙҙең шишмә тирәһендә
Матур ағастар үҫә.

**Айзилә СӘЛИХОВА,**
**Күгәрсен районының**
**Яңауыл мәктәбе уҡыусыһы.**

## Ҡурсаҡ

Минең ҡурсағым матур,
Исеме уның Зилә.
Үҙе йәнһеҙ булһа ла,
Йырлай һәм бейей белә.

Ҡыҙыл ғына ҡалпағы,
Алһыу төҫтә күлдәге.
Таҫма менән биҙәлгән
Күлдәгенең итәге.

Тап та топ баҫҡан була
Һары ситеге менән.
Бәхет табам уйнарға
Ҡурсағым менән генә.

**Лилиә ҠАҺАРМАНОВА.**
**Бөрйән районының**
**Байназар ауылы.**

## Күңелемдең бөрөләнгән сағы

Мин йәш әле. Барыһы ла алда.
Наҙлап һөйә әле әсәйем.
Ҡосағында ғына иркәләнеп,
Рәхәтләнеп кенә үҫәйем.

Киләсәккә – татлы хыялдарым.
Ил бәхете – беҙҙең ҡулдарҙа.
Төшкә керә оло асыштарым,
Гөл-сәскәләр үҫә юлдарҙа.

Мин йәш әле. Сабый күңелемдә
Бөрөләнә быуын шәжәрәһе.
Дәрт-дарманым урғый йөрәгемдә.
Шул түгелме йәшәү мәғәнәһе?

**Гөлфиә ЙӘРМӘКОВА,**
**Ейәнсура районының**
**Яңыбай мәктәбе уҡыусыһы.**

Республика йылы 1990 2010 Год Республики

## Башҡортостан

Башҡортостан –
тыуған республикам!
Шундай гүзәлһең һин, илкәйем.
Ниндәй генә төҫкә инһәң дә һин,
Яратамын, тыуған еркәйем.

Таҡыя башлы ҡурайкайың моңло,
Бигерәк татлы һинең балың да.
Сәскә ат һин, минең республикам,
Дуҫ йәшәһен барлыҡ халҡың да.

Тауҙарың да күккә олғашҡандар,
Тәрән һинең йылға-күлдәрең.
Матур баҡсаларҙа гөрләп үҫә,
Һине данлап, сәскә-гөлдәрең.

**Нәркәс ҠӘЙЕПҠОЛОВА.**
**Әбйәлил районының**
**Буранғол ауылы.**

## Светофор

Ҡалала иң кәрәк нәмә –
Светофор тора баҫып.
Һәр машинаға, кешегә
Ҡуя ул күҙен ҡыҫып.

Ҡыҙыл, һары һәм дә йәшел
Светофорҙың күҙҙәре.
Һәләкәттәрҙән һаҡлай ул
Машина, кешеләрҙе.

Янып торғанға күҙҙәре,
Йәнһеҙ булһа ла үҙе,
Ярҙам итә барыһына ла
Имен йөрөргә юлда.

**Лилиә ҠАҺАРМАНОВА,**
**Бөрйән районының**
**Байназар мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

# Ниңә рауза ҡырҙа үҫмәй?

**Әкиәт**

Борон-борон заманда сәскәләр батшалығында йәшәгән ти, маҡтансыҡ Рауза сәскәһе. Ул гел үҙен генә маҡтарға яратҡан. Ҡалған сәскәләр уға иғтибар итмәгән. Ә шул сәскәләр араһында булған, ти, иң матуры, иң һөйкөмлөһө – Мәк сәскәһе. Ул Рауза сәскәһе кеүек маҡтансыҡ булмаған. Барыһы ла Мәк сәскәһен яратҡан. Әммә Рауза сәскәһенең тылсымы булған, ул алдан нимә әйтә, шул килеп сыға, ти.

Бер көндө йыр буйынса ярыш булған. Бар сәскәләрҙе этеп-төртөп, Рауза сәскәһе алға сыҡҡан да, ҡалын тауышы менән йырлап ебәргән. Уның тауышы йәмһеҙ булһа ла, сәскәләр көлмәгән, сөнки сәнскеләренән ҡурҡҡандар. Икенсе булып Мәк сәскәһе сығып, яғымлы ғына тауышы менән барыһын да һоҡландырып йырлап ебәргән. Ә еңеүсене сәскәләр араһында йәшерен тауыш биреү аша билдәләйҙәр икән. Ярыш бөткәс, Мәк сәскәһе янына Нәркәс сәскәһе килә.

– Һаумы, Мәк, хәлдәрең нисек?

– Һаумы, Нәркәс, хәлдәрем һәйбәт кенә, – тигән Мәк.

– Ә беләһеңме, Мәк, ярышта бит һин еңеүсе булғанһың. Һинең тауышыңды барыһы ла иң матуры тип тапҡан, – тигән Нәркәс сәскәһе. Быны ишетеп торған Рауза сәскәһенең йәне көйгән. Ул былай тип уйлаған:

– Ул Мәк минән матурыраҡ йырланым тип маҡтанып йөрөр әле. Хәҙер мин уға бер тылсым ҡылам!..

Таң атҡас, Рауза сәскәһе Мәк янына килә.

– Хәйерле иртә!

– Хәйерле иртә! Ниңә былай таң менән йөрөйһөң? – тип һорай Мәк сәскәһе.

– Бөгөн төшкөһөн Зилә тигән ҡыҙ сәскәләр йыясаҡ, шунда ул һине өҙөп алып китә! – тип көлә-көлә ҡайтып киткән Рауза.

– Хәҙер миңә ни эшләргә? Мин беләм, Раузаның тылсымы бар, – тип илай башлаған Мәк сәскәһе.

Бына төш етте. Бер ҡыҙ сәскәләр йыйырға килде. Илап ултырған Мәк тағы ла матурыраҡ күренгәндер инде, ул Мәкте өҙөп алды ла, өйөнә йүгерҙе. Зилә уны әсәһенә бүләк итте. Уны баҡса сәскәләре менән бер һауытҡа ултыртып ҡуйҙылар. Ә Мәк сәскәһенең Сәскәлеккә кире ҡайтҡыһы килде. Бер таңда ул сәскәләр ярышында еңгән йырын йырлап ебәрҙе. Эргәһендәге баҡса гөлдәре уны иҫе китеп тыңланылар. Ә көн етеүгә Мәк сәскәһе һулығайны...

Сәскәләр батшалығында уның йырын әле лә йырлайҙар, ти. Ә Раузаны гөлдәр үҙ иленән ҡыуып ебәргән, ти. Шуға мәктәр яланда ла, баҡсала ла үҫә, ә раузалар яланда осрамай, ти.

**Наилә ЗАМАНОВА.**
**Баймаҡ районының Ниғәмәт ауылы.**

# Күңел бирмәй эшләгән эш – көлкө булыр

**Әкиәт**

Зәлиә бәләкәйҙән һәр бер эште ашыҡ-бошоҡ, “тиҙерәк бөтһөн” тип кенә эшләй. Иҙән йыуһа ла, өй йыйыштырһа ла – гел артынан әллә күпме сүп-сар ҡала. “Исем өсөн генә эшләй” тигәндәре 10 йәшлек Зәлиәгә тап килеп тора инде.

Бер көндө Зәлиә ҡустыһы Рәмил менән урманға еләккә йыйынды. Юлда уҡ Рәмил: “Әйҙә ярышайыҡ, кем күберәк йыйыр икән,” – тине. Зәлиә көлөп: “Һе, әйҙә һуң! Һин ярты сәғәт бер еләк эҙләгәнсе, минең кәрзинем тула инде!” – тип ризалашты.

Еләк йыя торғас, ваҡыт үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғандар, ҡайтыр сәғәт еткән. Кәрзиндәрен уртаға ҡуйып, кемдең еләге күберәк икәнен тикшерергә тотондолар. Зәлиәнең кәрзине саҡ ҡына тулмаған, ә Рәмилдеке яртылаш ҡына. Әй, үсекләне инде апаһы ҡустыһын! Рәмилдең кәйефе төштө...

Ҡайтып инеү менән Зәлиә атаһы, әсәһе, өләсәһе алдында маҡтанырға тотондо. Йәнәһе, ҡарағыҙ, кәрзинем тула яҙҙы.

Бер аҙҙан улар күмәкләшеп еләкте таҙарта башланылар. Зәлиәнең кәрзиненән бер еләкте алып ташланылар – боҙолған, икенсене, өсөнсөнө... Япраҡтар, үләндәр, хатта кәнфит ҡағыҙы ла килеп сыҡты. Бер аҙҙан кәрзинендә еләк саҡ ҡына ҡалды. Ә Рәмилдең бөтә еләктәре лә матур, ҡып-ҡыҙыл булып бешкән генә.

Шулай итеп, Зәлиәнең еләктәре әҙерәк булып сыҡты. Шунда өләсәләре балаларға былай тине: “Күңел биреп эшләгән эш – өлгө булыр, күңел бирмәй эшләгән эш – көлкө булыр. Һәр бер эште еренә еткереп эшләргә кәрәк, шунда ғына һөҙөмтәһе күренә”.

**Ләйсән ҒӘСИМОВА,**
**140-сы Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы.**
**Өфө ҡалаһы.**

Йән ауазы



# “Ышанам һиңә, улым!”

Бына нисәнсе тапҡыр инде йөрәктәрҙе һыҙлатып төшөмә инә атайым. Ҡәҙерле кешемде хәтерләмәйем. Яҡындарын ҡара ҡайғыға һалып, был донъяларҙан киткәнендә, мин бик бәләкәй булғанмын. Әсәйемдең һөйләүенә ҡарағанда, ул бик ҡыйыу, ғәҙел булған, мине бик яратҡан. Уларға йоҡо бирмәй илағанымда, ҡулдарында ғына йөрөткән. Әгәр атайым иҫән булһа, минең тормошом да, бәлки, икенсерәк булыр ине. Башҡа тиҫтерҙәрем кеүек, мин дә атайым менән балыҡҡа йөрөр, эштәрҙе бергәләп эшләр инек, уның кәңәштәре был еңел булмаған тормош юлында ярҙам итер ине.



Сөй ҡатам тип сүкеш менән яңылыш бармағыма һуҡҡан саҡтарҙа, ауыртыуҙан бигерәк, йөрәк әрнеүҙәренә түҙә алмай илағанда, кем ғәйепле, тигән һорауҙы бирә торғайным. Ысынлап та, кем ғәйепле минең атайһыҙ бала сағыма? Яуап бер генә – эскелек! Әгәр шул фажиғә булаһы көндә ике йәш егет спиртлы эсемлек менән аңдарын томаламаған булһа, бер ғәйепһеҙ атайыма бәйләнмәҫтәр, уны үлемесле итеп туҡмамаҫтар ине. Бер атайым ғынамы ни ошо “йәшел йылан” арҡаһында мәғәнәһеҙ үлем менән үлгән. Юл һәләкәте, суицид, кеше үлтереүҙәр – барыһы ла ошо заман афәте арҡаһында. Атайһыҙ ҡалған балалар, балаһыҙ ҡалған ата-әсәләр, тормошҡа ашмаған хыялдар…

Мин бер ҡасан да был ағыуҙы ауыҙыма алмаясаҡмын. Һәм һүҙемдә торасаҡмын! Сөнки мин үҙем өсөн генә түгел, атайым өсөн дә йәшәйәсәкмен!

Мин хәҙер тағы бер нәмәне аңланым, үҙең генә эсмәү етмәй икән. Бына, мәҫәлән, мин эсмәйем, матур тормошта йәшәйем икән. Әммә ошо йәмле тормошомдо аңы алкоголь менән томаланған берәй әҙәм актығы боҙоуы мөмкин бит.

Бына әлеге ваҡытта Башҡортостаныбыҙ, уның яҡты киләсәге өсөн янып йәшәүсе башҡорт егеттәре юҡмы ни? Бар, әлбиттә, ләкин бик аҙ. Сөнки күпселек егеттәр эскелек һаҙлығына батҡан һәм һәм бөтә нәмәгә битараф. Их, шуларҙы эскелек һаҙлығынан тартып сығарырға ине!

Беҙ бит – Башҡортостандың милләттең киләсәге. Милләтебеҙ йәшәһен өсөн айыҡ аҡыллы, рухлы кешеләр кәрәк. Ошо хакта синыфташтарыбыҙ менән йыш әңгәмә ҡорабыҙ. Иптәштәремдең барыһы ла тиерлек рухлы, ышаныслы. Беҙҙе берләштергән тағы бер нәмә бар – ул спорт. Бигерәк тә футболға мөкиббән киткәнбеҙ. Синыф таштар менән “ирҙәрсә” һөйләшергә, хыялланырға яратабыҙ. Илдархан тигән егетебеҙ киләсәктә Башҡортостаныбыҙҙың президенты буласаҡмын, ти. Әгәр берәйегеҙ мәрйәгә өйләнеп, балаларығыҙ русса һөйләшеп йөрөһә, мин һеҙҙе ҡабул итмәйәсәкмен, тип ебәрә. Бәлки, был кемгәлер көлкө тойолор, әммә мин уға ышанам. Булдырыр ул, бик ныҡыш, тырыш егет.

… Моңло аҙан тауышы күңелемдә яҡты киләсәккә өмөт уята. “Беҙ барыбер ошо яман сирҙе тамырынан йолҡоп ташлаясаҡбыҙ, республикамдың киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа буласаҡ!” – тигән матур уйҙар менән йоҡоға китәм. Ә төшөмә тағы атайым инәсәк һәм: “Улым, мин һиңә ышанам”, – тип әйтәсәк…

**Айнур ИГЕЛЕКОВ,**
**Сибай ҡалаһының**
**“Ирәндек” лицейы уҡыусыһы.**

# Бөтмөр хужа булыр ул



“Шәп егет ул”, – тиҙәр бөтәһе лә уның тураһында. Әле генә уҡыуҙан ҡайтҡаны күренһә, икенсе ҡарауға – атын һуғара, йә ҡуяндарын ашата, йәшелсә үҫтерергә лә ярҙамлаша, мотоциклда әсәһенең йомоштары буйынса барып килергә лә өлгөрә. Булыр бала – биләүҙән, ти халыҡ мәҡәле. Баймаҡ районының Өмөтбай ауылы егете, 8-се синыфты тамамлаған Камил Көмөшбаевтың киләсәктә бөтмөр хужа булыры бөгөндән билдәле. Ата-әсәһенең алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы, өлгөлө уҡыусы булыуынан тыш, әле үк үҙе аҡса эшләү яйын да тапҡан. Нисек тиһегеҙме?

2008 йылда Көмөшбаевтар ауылдашы Айнур Сәйетғәлиндан ике ҡуян һатып ала. Уларҙы тәрбиәләү Камилдың иңенә төшә. Тиҙҙән ҡуяндарының һаны арта ла башлай. Шунан башланып китә уҡыусының бәләкәй бизнесы. Бер тере ҡуяндың хаҡы йөҙ һумдан ашыу. Ҙурлығына ҡарап ул арта бара. Йәнлектең итен аталары ла Магнитогорск ҡалаһына алып барып һата.



Үткән йыл Камил ҡуяндарынан килгән табышҡа цифрлы фотоаппарат һатып ала. Бөгөн ул мәктәптең үҙ фотографы. Кисәләр, концерттар мәлендә уҡыусыларҙы фотоға төшөрә, саҡырыусылар булһа ла кире ҡаҡмай, уҡытыусыларҙың да үтенесен үтәй. Шулай итеп, фотолар һатып аҡса эшләү юлы ла килеп сыға.

Мәктәптә ОБЖ, физкультура, хеҙмәт дәрестәрен көтөп ала Камил. Киләсәктә автомеханик булырға хыяллана. Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән – тун бескән, тигәндәй, өс бала үҫкән өлгөлө ғаиләлә тәрбиәләнгән Камилдың киләсәге лә өмөтлө.

**Альбина САДИҠОВА.**

## “Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!

Хөрмәтле уҡыусылар! Май-июнь һандарында түбәндәге сәғәттең ошондай уҡ сирек өлөшсәләрен баҫып сығарғайныҡ. Артабан һеҙҙең бурыс – ошо һәм август айында сығасаҡ һандарҙан ҡырҡып алып, ошондай сирек өлөшсәләрҙән "Аманат"тың сувенир сәғәте һүрәтен йыйып, бергә йәбештереп, беҙгә ебәреү. Артына, әлбиттә, үҙегеҙ тураһында мәғлүмәттәрҙе тултырыһығыҙ.

Беҙҙең бурыс – редакцияға килгән һүрәттәр араһында лотерея үткәреп, һүрәттәге сәғәттең ысынын еңеүсегә тантаналы тапшырыу.

Уйындың йомғағы сентябрҙә иғлан ителәсәк.

**Әйткәндәй, “Аманат”ҡа 15 августка саҡлы яҙылһағыҙ, ул һеҙгә 1 сентябрҙән килә башлар.**



# Сабир ағайҙың арышы

**Күренекле селекционер, Социалистик Хеҙмәт Геройы Сабирйән Абдулла улы Ҡунакбаевтың ужым арышының данлыҡлы “Сулпан ”сортын сығарыуына – 35 йыл.**

Селекция ул – кеше ҡулы менән башҡарылған яһалма эволюция, тигән заманында бөйөк генетик Николай Вавилов. Хайуандарҙы ҡулға эйәләштереп, үҫемлектәрҙе махсус рәүештә үҫтерә башлағандан бирле кешелек уның менән шөғөлләнә. Әйтергә кәрәк, был өлкәләге ҡаҙаныштар кешенең техника өлкәһендәге ҡаҙаныштары менән сағыштырырлыҡ. Хәҙерге сорттарҙың кеше өсөн кәрәкле сифаттарын уларҙың тәбиғәттәге туғандары менән сағыштырып ҡараһаң, айырма ер менән күк араһындағы кеүек килеп сыға. Ярты быуаттан ашыу ғына ғүмер эсендә, мәҫәлән, тап беҙҙең шарттарға яраҡлаштырылған яңы сорттар арҡаһында Башҡортостан әкиәттәрҙә генә һүрәтләнгән гөл-баҡсаға әйләндерелде. Хәҙер өйө алдында баҡса үҫтермәгән кеше лә юҡ. Ә был эште иң беренсе булып башлаусы кем була инде? Иң тәүҙә ул эш кешенең: “Ә ниңә әле был үҫемлекте беҙҙең Уралда ла үҫтереп булмаһын?” – тигән һорауынан һәм шул йүнәлештә анык эштәргә күсеүенән башлана. Бөгөнгө һүҙебеҙҙе лә шундай кешеләрҙең береһе,



Сабирйән Ҡунакбаев

Николай Вавиловтың уҡыусыһы, Башҡортостанда һәм Советтар Союзында билдәле селекционерҙан башларға кәрәктер.

Социалистик Хеҙмәт Геройы Сабирйән Абдулла улы Ҡунакбаев 1901 йылда Хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районының Олокүл ауылында тыуған. Русса бер ауыҙ һүҙ ҙә белмәгән килеш, ул күрше Бишауыл-Уңғар ауылындағы земство мәктәбен яҡшы билдәләр менән тамамлай ала. Үҙе белемһеҙ булһа ла, балаларын уҡытырға ынтылған, дини кеше булған атаһы Сабирйәнде Өфөләге “Хакимиә” мәҙрәсәһенә бирә. Унда өс йыл уҡығас, Сабир ул заманда бик алдынғыларҙан һаналған “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә күсә. Шунда аслы-туҡлы көн иткәндә үҫмерҙең башына киләсәктә агроном-ғалим булырға, барыһына ла етерлек иген үҫтерергә тигән хыял-маҡсат һалына ла инде. Әммә яҙмыш һәм ауыр заман елдәре уны байтаҡ өйрөлтөп йөрөтә әле. “Икмәкле ҡала” Ташкентҡа барып эләккәс, ул Башҡортостан обкомынан алған тәҡдим ҡағыҙы менән Төркостан дәүләт университетының рабфагына барып инә ала. Артабан Мәскәүҙә Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһын тамам-



“Сулпан” арышы

# ҡоролоҡҡа бирешмәй

лағас (1922-27 йылдар), ул Башҡортостанға ҡайтып, орлоҡсолоҡ эшен яйға һалырға тотона. 1912 йылда ойошторолған Шишмә тәжрибә станцияһында ул 63 йыл эшләй, шул осорҙа төрлө үҫемлектәрҙең 19 сортын сығара, 95 йәшенә тиклем яратҡан шөғөлөнән айырылмай.

Ужым арышының "Сулпан" сортын сығарыуҙы (1975), агрономияла Сабирйән Ҡунаҡбаев яһаған ҡаһарманлыҡ, тип һанай белгестәр. Ҡыҫҡа, йыуан һабаҡлы булыуы арҡаһында йығылмай торған, ҡышҡы иң ҡаты һалҡындарға ла бирешмәгән, ҡоролоҡҡа ла сыҙамлы был сорт гектарынан 60-70 центнер иген бирергә һәләтле. Шул сифаттары арҡаһында ул тиҙ арала тотош Советтар Союзына таралып китә, сит илдәргә сыға. "Сулпан", үҙ сиратында, бик күп яңы сорттарҙың нигеҙенә ята, артынса "Сулпан-3", "Сулпан-7" сорты барлыҡҡа килә, унан "Ҡунаҡбаев иҫтәлеге" тигән арыш та үҫтерелә башлай.



"Башҡортостан" йөҙөмө

Шишмә станцияһы нигеҙендә 1959 йылда ойошторолған Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты – республикала агросәнәғәт өлкәһендә алдынғы ҡаҙаныштарҙы тәьмин итеп тороусы ҙур ойошма. Үҫемлектәрҙең яңы сорттарын сығарыу – төрлө зоналарҙа урынлашҡан 9 тәжрибә хужалығы булған институттың бер йүнәлеше генә. Ә беҙҙең ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында махсус яраҡлаштырып сығарылған сорттар булмаһа, ауыл хужалығында бер ни эшләп булмаҫ ине: баҫыуҙарҙы беҙҙә йә ҡоролоҡ яндыра, йә үтә һалҡын ҡыштар туңдыра, йә һуң ҡырауҙар һуғып ҡуя. Ужым арышының игенселектә үҙенсәлеге лә шунда: ул көҙҙән үҫеп етеп, яҙғы дым менән тулыша ла башлай, ә быйылғы һымаҡ ҡоро йылдарҙағы эҫелек башҡа игендәрҙе көйҙөрөп бөткәндә, арыш өлгөргән дә була.

Институттың ҡаҙаныштары тураһында ғына ҡалын китап яҙып булыр ине. Иген һәм фураж культуралдарының яң сорттарын сығарыуҙан тыш, унда баҡсасылыҡ буйынса ла бик ҙур эш алып барыла. Әгәр беҙҙең республикала ҡасандыр көньяҡ емештәре һаналған алма, груша, йөҙөм (виноград) кеүек ағастар ғәҙәти күренешкә әйләнеп, һәр баҡсасы уларҙан мул уңыш алып ҡыуана икән, бында беҙ Ауыл хужалығы институты сығарған яңы сорттарға ғына рәхмәтлебеҙ. Әйтергә кәрәк, заманында данлыҡлы селекционер Иван Мичурин 1907 йылда үҙенең тәжрибәләре өсөн ҡырағай сейәне тап Башҡортостандан килеп алыуы билдәле.

Малсылыҡ өлкәһендә институттың ҙур һәм үҙенсәлекле ҡаҙанышы тип Башҡорт балы һымаҡ уҡ республиканың даны булған ҡымыҙҙы ҡышын да етештереү технологияһын иҫәпләргә кәрәктер. Был бейә һөтөн киптереп, порошокты ҡышын ҡымыҙ әсетеү өсөн файҙаланыу арҡаһында мөмкин булды.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

# ЭСКЕ ЙЫЛАН ЫРЫУЫ БАШҠОРТО БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ НӘҪЕЛ ШӘЖӘРӘҺЕ




**Ырыуы – йылан**
**Ағасы – ҡайын**
**Ҡошо – ҡарға**
**Ораны – туҡсаба**
**Тамғаһы –** ↓

Назар Нәжми, Башҡортостандың халыҡ шағиры

# МИЛЛӘТТЕ ТУПЛАҒАН КӨС НИМӘЛӘ?

Беҙҙең ауыл мәктәбенең диуарына Башҡортостандың географик картаһы йәбештереп ҡуйылғайны. Унда ҡала һәм ауыл исемдәре ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған. Ул картаны хәҙер хәтерләүсе тере кешеләр бармы икән? Юҡтыр. Ә ниңә һуң ул һаман минең хәтерҙә? Беренсенән, ғәрәп хәрефтәре менән “Урал ублысы” тип яҙылған һүҙҙәрҙәге “У” хәрефе (ул саҡта әле Силәбе, Ырымбур өлкәләре булмаған-дыр) хәҙерге Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла райондарының көнсығыш сиге буйлап һуҙылғайны. Дәрес барған ваҡытта Арыҫлан Ситдиҡов тигән малай менән шул картаға ҡарап һөйләшеп ултырғанды күргәс, уҡытыусы партала ятҡан, үҙем яһаған ҡәләм тартмаһы менән минең башты төйә башланы. Тартманың ҡапҡасы асылып, осоп китҡән ручка пероһы менән Арыҫландың ботона барып ҡаҙалды. Минең күпкән баш оҙаҡ ауыртып йөрөнө, шуның өсөн дә географик карта шул ауыртыу аша хәтерҙә ҡалғандыр.



Ул ваҡытта Башҡортостандың кантондарға бүленгән сағы ине. Беҙ, уҡыусы балалар, дәрестә кантондарҙың исемен әйтә-әйтә, уларҙы сиктәре буйлап бармаҡты йөрөтә-йөрөтә күрһәтеп сыға инек. Шунда Башҡортостандың тотош еренән айырылып, бер ҙур утрау булып Арғаяш кантоны ята ине, ә көньякта иһә икеме-өсмө кескенә шундай утрауҙар бар ине. Был “утрауҙар” башҡорттарҙың күмәк йәшәгән урындары булыуы, уларҙың Башҡортостанға кереүҙәре тураһында һөйләй ине. Нисәнсе йылдарҙа икәнен белмәйем, ахырыһы, Башҡортостанда райондар хасил булған саҡтарҙалыр, шул “утрауҙар” барыһы ла юҡ булды.

Донъя тарихында милләттәрҙе ҡырыу-бөтөрөүҙең төрлө ысулдары булған. Донъяла геноцид тигән һүҙ ҙә бар. Тамырында грек һүҙе “ген” ятҡан был төшөнсә һүҙлектә шулай тәржемә ителгән: ”раса һәм милли сәбәптәр буйынса кешеләрҙең айырым төркөмдәрен юҡ итеү – кешелеккә ҡаршы енәйәт”. Ә төрлө “уңайлы” шарттар тыуҙырып, хәйлә һәм ялғанға ышандырып, баштарҙы томалай-томалай йылдар буйына халыҡты юҡ итеү сәйәсәте алып барыла икән, уны нисек тип атарға? Мин уны “цивилизациялаштырған геноцид” тип атар инем. Халыҡтар “сәскә ата-ата” ер йөҙөнән юғала.

Хәтеремдә, 1967 йылда Силәбе өлкәһенең башҡорт ауылында беҙ башҡортса шиғыр уҡығанды тыңлаған әбей-әсәләр илап ултырҙы, һәр хәлдә беҙҙең шиғырҙарҙың сифатынан түгел, ә һуңынан үҙҙәренең һөйләүенә ҡарағанда, беҙҙең башҡортса сығыш яһауҙан, сәхнәнән башҡорт теле яңғырауҙан илағандар икән. Өфөнөң нефтселәр мәҙәниәт һарайында Силәбе өлкәһенең Ҡолой ауылынан килгән башҡорттарҙың концертын тыңлағанда, хәҙер инде минең, теге әбейҙәрҙеке шикелле, күҙҙән йәштәр сыҡты.

1996 йылда беҙ, алты йөҙләп (!) кеше, Ырымбурға барып, бейеп-йырлап ҡайттыҡ. Етәкселәр килешеү ҙә төҙөнө. Барыһы ла һәйбәт, күңелдә шатлыҡ, ләкин ул да, миңә ҡалһа, моңһоу... 70-се йылдарҙа Ырымбур өлкәһенең Һунарсы ауылы аҡһаҡалдары, Башҡортостанға ҡушылыуҙы һорап, партияның өлкә комитетына барғандар, унда уларға: ”Олобайҙы – бесәнлектәрегеҙҙе ҡалдырығыҙ ҙа, ҡушылығыҙ Башҡортостанға”, – тигәндәр. Был хәлдән һуң нисек итеп инде Башҡортостандың тәүге географик картаһын тағы ла хәтерләмәйһең...

Мин сәйәсмән дә, тарихсы ла, экономист та, дәүләт эшмәкәре лә, бер һүҙ менән әйткәндә, бер кем дә түгел. Шуның өсөн дә суверенлыҡты үҙемсә, бер ҡатлы ғына күҙ алдыма килтерәмдер. Беҙҙең хужалыҡ етәкселәре Башҡортостандың суверенлығын, хужалыҡ эштәрен Мәскәүҙән башҡа үҙ алдына хәл итеүҙә генә күрә. Ә бит үҙаллылыҡ – бер нәмә, суверенлыҡ – икенсе нәмә. Әгәр ҙә Ырымбур өлкәһенең Һунарсы ауылы кешеләре Башҡортостанға ҡушылырға теләй икән, республиканың нефткә, күмергә, тимер-томорға бай булғаны өсөн түгел. Уларҙы беҙгә халыҡ рухы, туған тел, туған ғөрөф-ғәҙәт тарта. Бер һүҙ менән әйткәндә, йән тарта. Донъяла шул йән тартыу көсөнән дә көслөрәк көс бармы икән?



# Мактансыҡ Вәли

Юныс Зөбәйеров

Вәли һөйләй дуҫтарына
(Ышанғандар ышана).
Йөҙө етди. Тауыш ҡаты.
Ышанмайса ни сара?

Күкрәгенә һуға Вәли,
Уттар сәсә күҙҙәре.
Минең алдағаным юҡ, – ти, –
Һүҙем – китап һүҙҙәре.

Китапта, ти, бәлки, булыр
Дөрөҫлөктән тайпылыу.
Тик минең юлым бер генә –
Хаҡ юлдан ғына барыу.

Ошо минең төп сифатым,
Яратмайым ялғанды.
Бер ни һөйләмәһәң була,
Һөйләһәң, тик ысынды.

Унан, мактансыҡтарҙы мин
Яратмайым күптәнән.
Маҡтансыҡ ҡуйырға уйлай
Үҙен өҫкә күптәрҙән.

Танытырға уйлай үҙен
Әллә ниндәй кеше тип.
Тик уйҙырма һөйләп кенә
Батыр булып булмай бит.

Бармаҡтан һурылған тарих
Һөйләй беҙгә ундайҙар.
Имеш, кешеләр бер ҡатлы,
Барыһына ышаналар.

Кешеләрҙең күҙен буяу –
Ошо уның теләге.
Ботло герҙе, имеш, сөйә,
Ә еп кеүек беләге.

Уны тыңлаһаң, ул йөҙә
Балыҡтан да шәберәк.
Ә тикшерһәң – тора белә
Һыу өҫтөндә әҙерәк.

Бына шундай кешеләрҙе
Яратмайым бөтөнләй.
Уты бик бәләкәй генә,
Төтөнләпме төтөнләй.

Мин үҙем бик тыйнаҡ кеше,
Яратмайым маҡтанырға.
Ләкин баштан үткәндәрҙе
Ник һөйләмәй ҡалырға?

Бына, һөйләп бирәм һеҙгә
Баштан үткән бер хәлде.
Әжәл тынын өрә ине,
Мин алданым әжәлде.

Әжәл тынын һиҙә инем.
Үлем йөрөй эргәмдә.
Тик ҡотолдом, бының өсөн
Дөрөҫ юлды белгәнгә.

Ҡыш көнө урманға барҙым,
Тоҙаҡ ҡуйҙым ҡуянға
Донъялар йәмләнеп китә
Ҡуян ите булғанда.

Яратам өҫтәл артында
Ашарға бәлеш төбө.
Ҡуян ите – иң тәмле ит.
Аңламай быны күбе.

Ҡуян ите ашағанда,
Көс тә була күберәк.
Ҡуян ите ашап алһаң,
Йәшәүе күңеллерәк.

Сырҡылдаша, сырҡылдаша,
Ҡошсоҡтар тешен ҡайрай,
Ҡуян ите тәмләгәндә
Улар ҙа матур һайрай.

Элек ҡуйған тоҙағыма
Берәү эләккән ине.
Оло ҡуян. Шатлығымдан
Бүректе күккә сөйҙөм.

Ғәмәлдә тоҙаҡ – башватҡыс.
Сисһәң – ғүмер. Ал. Бүләк!
Һирәк ҡуян сисә уны,
Эләгәләр күберәк.

Ҡайтып барам. Ашыҡмайым.
Кәйеф шәп. Ҡуян ҡулда.
Ул ҡышты ҡар ҙа әҙ ине.
Барырға таҡыр юл да.

Йырлап ебәрҙем шатлыҡтан.
Шул саҡ – ҡот осҡос олоу!
Һоро йәнлектәрҙер, тием,
Мөмкиндер шулар булыу.





Урманда бүре күплеген
Белә инем. Тик ниңә
Минең кеүек саҡма ташҡа
Бүреләрҙән өркөргә?

Алыш икән – алышырмын,
Һалышһаҡ – һалышырмын.
Бүре аулаусылар бар бит,
Мин кемдән ҡалышырмын?

Кинәт урмандың эсенән
Йөҙ бүре килеп сыҡты.
Уйлай был үткер тешлеләр:
“Бына бит, Вәли ҡапты!”

Уйлай был туймаҫтамаҡтар:
“Хәҙер, ашайбыҙ быны.
Һарыҡтан был тәмлерәктер,
Сөнки юҡ уның йөнө.



Тамаҡ ялғап алабыҙ ҙа,
Йоҡлайбыҙ унан ятып...”
Ә минең ҡулда мылтыҡ юҡ.
Булмай быларҙы атып.

Бәхетемә күрә, ҡулда
Ҡуян бар ине минең.
“Был ҡуян йөҙ ас бүренән
Ҡоткарыр мине,” – тинем.

Ҡуян ауыр. Үлсә тиһәң
Биш кило тартыр ине.
Был ҡуянды сауҙагәрҙәр
Мең һумға һатыр ине.

Миңә ташлана бүреләр.
Мин теге ҡуян менән
Барлыҡ көсөмдө һалам да,
Маңлайҙарына бирәм.

Маңлайына бәргәс, бүре
Йығыла ла, йән бирә.

Бер бүре тиреһе – мең һум!
Хатта көләһе килә.

Бер киҙәнһәм, мең һум керә,
Мең тәңкә – бер киҙәнеү.
Ҡуян башы ҡаты була,
Бүре башы түҙәме?

Ярыла бүре баштары,
Ә ҡуян башы сыҙай.
Башҡа нисек булһын эштәр,
Мин әйткәнемсә булмай?

Аҡыллыла ҡуян барҙа,
Сукмарың ары торһон.
Сукмар менән өс һуғырҙы
Ҡуянды бер һуғаһың.

Байыйһы көнөм икән, тим.
Кеҫәгә аҡса тула!
Тағы өсәүҙе үлтерһәм,
Тиреләр һикһән була.

Аҡыллылары аңланы –
Уларҙы үлем көтә.
Улай-былай ташланалар.
Тик минең дә хәл бөтә.

Ә бирешергә ярамай.
Бирешһәм бит мин бөтәм!
Йәшәргә хаҡлы булыуҙы
Ҡулдағы көс хәл итә.

Ас бүреләр ырғый тора,
Ә мин тондора торам.
Йөҙ бүрегә бер үҙем һәм
Бер ҡуян ҡаршы тора!

Биргеләйем кейектәрҙе,
Кәрәктәрен алһындар.
Шулай үлтереп бөтөрҙөм
Йөҙ бүренең барыһын да...

Хайран ҡалып тыңлай уны
Ауылдағы малайҙар.
Улар Вәлигә һоҡланып,
Ғәжәпләнеп ҡарайҙар.

Бары Вәкил генә көлә.
Йә, әйт, ниңә көләһең? –
Тип һораны Вәли унан. –
Әллә серен беләһең?

Беләм шул, – ти уға Вәкил. –
Уйҙырмалар һөйләйһең.
Ышанырҙар тип уйлайһың.
Ышанмайым. Белмәйһең.

Ике бүрегә лә ҡаршы
Бер ҡуян тора алмай.
Бер ҡатлы ауыл малайын
Рәхәтләндереп алдай!

Бирегеҙ икмәк, – ти Вәли, –
Икмәк тотоп ант итәм!
Йөҙ бүре башына еттем.
Килтер икмәк. Мин көтәм!

Вәли кепкаһын һала ла,
Ырғыта уны ергә.
Бүре миңә нимә ул? – ти, –
Уны мин еңел еңәм.

Беҙҙең урманда айыу юҡ,
Бына шуға ҡайғырам.
Алышырға, тигән уй, ти,
Йөрәгемде яндыра.

Айыуға сығам мин бары
Ҡулдағы хәнйәр менән.
Йөрәгенә ҡаҙайым да,
Урман ханын үлтерәм.

Мин айыуҙан ҡурҡам тиме?
Ҡурҡмайым да һис ҡасан.



Мин айыуҙан ҡасмайым, ти,
Айыуҙар минән ҡасар.

Икенсе көнө мәктәптә
Вәли тағы маҡтана.
Өс йыллап элек мунсала
Иттем мин, ти, тантана.

Нисек тантана иттең? – тип
Һорашалар малайҙар.
– Мин һөйләрмен ул, – ти Вәли. –
Ышанһағыҙ ярай ҙа.

Кеше ышанмаҫлыҡ хәлдәр
Булды, дуҫтар, ул төнөн.
Үлемдән ҡотҡарып ҡалды
Батыр булыуым минең.

Дөрөҫөн һөйләһәң, – тиҙәр, –
Ниңә, ти, ышанмаҫҡа?
Һүҙ бирәм дөрөҫ һөйләргә,
Һүҙ бирәм алдамаҫҡа.

Маҡтанырға яратмайым.
Маҡтанһындар ҡалғандар.
Минең иң яҡын дуҫтарым
Хаҡлыҡты яҡлағандар.

Эш былай булды… Шул йылды
Мунса керәмен төндә.
Бер мәл килеп сыҡмаһынмы
Минең янға ас ендәр!

Унлап ен бар. Күрер күҙгә
Ҡот осорлоҡ барыһы ла.
Шундай хәтәр баҫып тора
Ендәр минең ҡаршыла.

Сыйылдашалар бит былар,
Тештәрен ыржайталар,
Ҡай берҙәре, ырғып менеп,
Елкәмә үк яталар.

Нишләйһегеҙ бында? – тием,
– Ҡамасаулайһығыҙ миңә.
Алтынығыҙ булһа әгәр,
Бирегеҙ берәй биҙрә.

Йәмһеҙ тауышлы берәүһе:
Алтын кәрәкме? – тине,
Шунан түбәтәйен һалып,
Түбәгә табан сөйҙө.

Ен түбәтәй кейәме ни? –
Һорау бирә бер малай.
Вәли әйтә:
Ул ендәргә
Түбәтәйһеҙ ярамай.

Ен күргәнең юҡмы ни, – ти. –
Улар кейемһеҙ булмай.
Тик кешегә күренмәйҙәр,
Төнгө ун ике тулмай.

Шунан, шунан? – тине берәү.
– Беләйек эш аҙағын.
Биреп тора һиңә яҙмыш
Был донъяның ғазабын.

Шунан береһе ныҡ итеп
Типте минең арҡама.
Ендән алған ул йәрәхәт
Әле булһа һаҡлана.

Һеҙ улаймы әле, тинем.
Эләктерҙем бер таяҡ.
Был таяҡ менән була, тим,
Ҡабырғаларҙы һанап.

Һыйлай башланым быларҙы.
Баштарына тондорам,
Ҡулдарын миңә һуҙһалар,
Ҡулдарына ҡундырам…

Тайышып бөттөләр ендәр.
Әллә ҡайҙа булдылар.
Нишләһендәр инде улар? –
Тондорам да ҡундырам.

Әле баштарына бәрәм,
Ҡабырғалар һынайым.
Белеп торһондар йүнһеҙҙәр,
Мин – уларҙың ағаһы!

Оло ағалары булам,
Быны ныҡ аңлаһындар.
Минең һүҙ – ҡанун уларға,
Төшөнмәй ҡараһындар!

Береһен эләктереп алдым,
Ебәрмәйем тегене.
Ни әйтһәң, шуны үтәйем,
Ебәр инде, – ти, – мине.

Минең арҡаны йыуырһың,
Ҡулым етмәй, – тим, – минең.
Баш өҫтө! – ти миңә ен, –
Арҡаңды йыуам һинең.

Шулай ен ярҙамы менән
Йыуындым мин мунсала.
Ендәрҙән мин
һис ҡурҡмайым,
Кемеһе ҡурҡытһа ла.

Малайҙар баштарын сайҡай:
Ғәжәп хәл булған, – тиҙәр. –
Ниндәй мажаралар булмай
Батыр кешеләр менән.

Башҡаға ышанмаҫ инек,
Билдәле ҡыйыулығың.
Йөҙ бүрене еңгәнһең бит,
Яңылыштан юлығып.

Ендәрҙе лә еңгәнһеңдер.
Был хәл булмаҫ, тимәбеҙ.

Иң батыры һин ауылда,
Ышанабыҙ күбебеҙ.

Бәлки, бөтә дәүләттә лә
Һиндер иң батыр кеше.
Ташҡа уйып яҙырлыҡ бит
Һин эшләгән һәр эште.

Китап итеп сығарырлыҡ
Һинең мажараларҙы.
Сират тороп аласаҡтар,
Уҡырға тип уларҙы.

Йәй көнө бар малайҙар ҙа
Йүнәлделәр урманға.
Еләк быйыл бик күп тиҙәр,
Исәп – еләк йыйырға.

Алдан бара беҙҙең Вәли,
Үҙе һөйләнеп бара:
Бәхетем булып, бүреләр
Осрап ҡуйһалар ярай.

Тере килеш тотоп берен,
Ауылға алып ҡайтам.
Унан ҡалаға илтәм дә,
Зоопаркка мин һатам.

Шулай итеп байып китәм,
Машина һатып алам,
Кәрәк ергә йәйлы итеп,
Ултырып ҡына барам…

Килеп еттеләр урманға.
Еләк күп – йыйыусыға.
Шунда Вәли ҡаршыһына
Бер ҡуян килеп сыға.

Тертләп китте батырыбыҙ
(Ҡуш күренде ҡурҡаҡҡа).
Ҙур бүрегә оҡшатты ул
Ошо оҙон ҡолаҡты.

Ҡуян йүгерә бер яҡҡа,
Вәли – икенсе яҡҡа.
Бүре ҡыуып килгән кеүек
Тойола был ҡурҡаҡҡа.

Бүре ҡыуып етер төҫлө.
Бөтәһең, етһә ҡыуып.
Уның бысаҡ тештәренә
Булмай бит ҡаршы тороп.

Шулай сабалар был икәү
Икеһе ике яҡҡа.
Тик Вәли шәберәк елә,
Әйтерһең дә ҡорт саҡҡан.

Ҡуян инде ял итергә
Ҡыуаҡ аҫтына сумды.
Алғы аяҡтарын һуҙып,
Ул инде күҙен йомдо.

Ә Вәли һаман да саба,
Ғыж-ғыж итеп тын алып.
Бүре ҡыуып тотор төҫлө.
Һис тә булмай туҡталып.

Бына Вәли өйөнә лә
Йүгереп ҡайтып керҙе.
Кергән ыңғайы был батыр
Бик тиҙ келәнә элде,

Һәм йығылды, хәлдән тайып.
Ағаһы, быны күреп:
Нимәнән ҡурҡтың һин? – тине.
Һораны бер аҙ көлөп.

Ҙур арыҫлан килеп сыҡты,
Шунан ҡасыуым, – тине.
Ә ағаһы һаман көлә
(Нишләһен инде көлмәй?):

Ҡойроғонан эләктереп,
Алып ҡайтманың ниңә?
Арыҫлан нимә?
Һин бит батыр,
Һин бит ендәрҙе еңгән!

Ендәрҙең кәрәген биргән
Ҡурҡмай ул бер нәмәнән.
Батшаға ла ҡаршы сыға,
Бер үҙе, ҡылыс менән.

Йәнлектәрҙең батшаһына
Ғына ҡаршы торалмам.
Йыртҡыстар батшаһы көслө,
Уға тоҙаҡ ҡоралмам.

Батша менән алышырға
Әлегә етмәй көсөм.
Үҫкәс исәпләшермен тип,
Хәҙергә йыям үсем.

Төйнәп бәйләп ҡуясаҡмын
Ҡойроғон мин уның.
Ысынлап шулай буласаҡ!
Камил быға иманым!…

… Вәли тағы шапырына,
Тағы ҡысҡыра Вәли,
Батырлығын иҫбатларға
Килтерә төрлө дәлил.

Шулай, дуҫтар, бер нимә лә
Маҡтансыҡты терелтмәй.
Башҡа сирҙе еңеп була,
Тик был сир бер ҙә бөтмәй.



# Нимә ул GPS?




GPS (инглизсә – Global Positioning System) – теге йәки был объекттың координаттарын билдәләүҙең глобаль системаһы.

Ул объекттың яҫылыҡтағы һәм араҙыҡтағы урынын 100 метрға тиклем теүәл билдәләй. Уның дәүмәлен һәм диңгеҙ кимәленән бейеклеген дә, хатта йүнәлешен, тиҙлеген дә бер наносекундҡа тиклем дөрөҫ ваҡытта теүәл билдәләй ала. GPS – навигатор ярҙамында юлдаштарҙан сигнал алып, кеше лә әлеге ваҡытта Ерҙең ҡайһы урынында торғанын дөп-дөрөҫ аҫыҡлай ала.

GPS – Ерҙең яһалма юлдаштары менән ерҙән күҙәтеү системаһының берләштергән дөйөм селтәр (NAVSTAR юлдаштар системаһы). NAVSTAR системаһы 1978 йылда барлыҡҡа килгән. Ул алты төрлө орбитала урынлашҡан 24 яһалма Ер юлдашын үҙ эсенә ала. Һәр бер юлдаштың бер-береһенә ҡарата орбита ауышлығы 60 градус тәшкил итә. Һәр миллисекунд һайын юлдаш Ергә түбәндәге мәғлүмәтте ебәрә: үҙенең торошон, хәҙерге көндә, ваҡытты, альманах мәғлүмәтен (һәр бер юлдаштың орбитала ҡайһы ерҙә, ниндәй ваҡытта һәм үҙенең техник мәғлүмәтен туплаусы йыйынтыҡ), бөтә хәбәрҙәрҙең Ергә ебәрелеү ваҡытын.

GPS-приемник юлдаштарҙан алған мәғлүмәт нигеҙендә үҙенең һәр бер юлдашҡа ҡарата аралығын иҫәпләп сығара. Ә юлдаштар араһы билдәле булғас, геометрия законҙарын ҡулланып, үҙенең ҡайҙа урынлашҡанын билдәләй. Объекттың урынлашҡан яҫылығын һәм араҙығын билдәләү өсөн өс юлдаштан алған мәғлүмәт етә, ә диңгеҙ кимәленән бейеклеген асыҡлар өсөн дүртенсе юлдаш ҡатнаша. Радиосигналдарҙың таралыу тиҙлеге гел бер үк һәм яҡтылыҡ тиҙлегенә тигеҙ. Ошо үҙенсәлекте ҡулланып эшләй ҙә инде GPS-навигатор.

Приемник хәбәр алған ваҡыт менән юлдаш хәбәр ебәргән ваҡыт араһындағы тотҡарлыҡ менән билдәләнә. Әлбиттә, араны дөрөҫ билдәләү өсөн приемник менән юлдаштың сәғәтәре бер тигеҙ йөрөргә тейеш.



Был приемниктарҙың, ниндәй өлкәлә ҡулланылыуына ҡарап, төрҙәре бар. Иң киң таралған дүрт төрө бар:

Персональ GPS приемник – шәхси ҡулланыу өсөн тәғәйенләнгән был приемниктар бәләкәй генә, әммә мөмкинлектәре бик күп.



Күрһәтелгән йүнәлеште табып, унда тиклем нисек, ҡайһы юлдан барыу маршруттарын иҫәпләп сығарыу мөмкинлеге лә ҡаралған. Ҡайһы бер төрҙәре хатта интернет селтәренә тоташа ала. Хәҙерге ваҡытта кеҫә телефонына ла ҡулайлаштырылған, аҡсаң ғына булһын.



Автомобиль GPS-приемниктары машинаның ҡайһы ерҙә китеп барыуын, уның тиҙлеген, маршрутын автоматик рәүештә билдәләү өсөн ҡулланыла. Ҡала таксистары системаһында киң таралыу алған.

Диңгеҙ GPS приемниктарына ультратауыш менән эшләүсе эхолот ҡулайлаштырылған, хатта картография и гидрография принтерҙары беркетелгәне лә осрай. Авиация GPS-приемнигы пилотһыҙ самолеттарҙы осороуҙа һәм һәр бер самолеттың автопилот системаһында ҡулланыла.

Донъяла шундай уҡ икенсе навигация системаһы бармы? Беҙҙең илдә етештерелгән ГЛОНАСС хәрби-йылан системаһы бар. Ул NAVSTAR-ға ҡарағанда мәғлүмәтте күпкә тулыраҡ бирә һәм хәҙерге ваҡытта иң популяр навигация системаһы булып тора.

# "Һаусынсы" йылан

БУЛҒАН ХӘЛ

Һаҡмар йылғаһында балыҡ ҡармаҡлап ултырғанда бер туҙбаш йылан йылға аша йөҙөп сығып китте. Уны күргәс, бала саҡта үҙем шаһит булған кеше ышанмаҫлыҡ бер ваҡиға иҫемә төштө.

Был хәл 1940 йылдың эҫе йәйе көндәренең береһендә булды. Ике көн буйы өҙлөкһөҙ яуған ямғырҙан бесән эше туҡтап ҡалды. Беҙ, бесәнселәр, (сабыусыларҙан башҡалары) ауылға ҡайттыҡ. Мин күбә тарттыра инем. Иртәгәһен көтөүҙән һыйырҙы ҡаршы алып, өйгә ҡыуып алып ҡайтып килгәндә, көтөүсе Арсентей Ляпкин мине ҡыуып етте лә бергә атланыҡ. Ул Петровка (Нуҡайлы) ауылынан килеп, һыйыр малын көтөргә ялланып, улы менән ҡатынын да күсереп алып килеп, Ҡашҡар ауылында йәшәй ине. Мин, ҡапҡаны асып, һыйырҙы ишек алдына индергәс, "Был һеҙҙең һыйырмы?" – тип һораны ла:

– Хозяйка, сыҡ әле, – тип әсәйҙе саҡырҙы. Яртылаш русса, яртылаш башҡортса һорашырға тотондо: "Хозяйка, аҡ баш һыйырыңдың уң яҡтағы артҡы имсәгенең һөтө әҙәйҙеме? Ҡасандан бирле шулай?"

– Бер аҙна инде һөтө юҡ, тиерлек. Елененән аға, тиһәң, бот бурбайҙары таҙа. Ни булғанын да аңламайым.

– Ну, сосед, (улар беҙҙән өс өй аша йәшәйҙәр ине) бер нәмә тураһында мин үҙем дә кисә генә белдем. Иртәгә көтөүҙе ятаҡҡа төшөргәс , мине шунда көтәгеҙ. Үҙең бара алмаһаң, улыңды ебәр. Минең Коля менән барырҙар. Мин һеҙгә ғәжәп бер нәмә күрһәтәм, – тине лә, көтөүсе, сыбыртҡыһын урап тотоп, таяғына таяна-таяна, ҡайтып китте.



Иртәгәһен беҙ уның улы Коля менән иртәрәк һыйыр ятағына барып, балыҡ ҡармаҡлап, мәж килеп, көтөүҙең килеүен көтөп алдыҡ.

Һыйырҙар ятаҡҡа килә башлағас, Арсентей, үҙе алдан килеп, беҙҙе саҡырып алды. Аҡ баш һыйырҙың килеүен көтөп алдыҡ. Иғтибар менән күҙәтергә ҡушты. Һыйыр быҙауына баҡырғандай, баҡыра-баҡыра, ыҙылдап быҙауын саҡырғандай итеп килеп, бер асалы серек ерек түңгәгең ашатлап торҙо. Түңгәк төбөнән 50–60 см самаһы оҙонлоҡтағы (бәлки, оҙонораҡ булғандыр) туҙбаш йылан килеп сыҡты. Түңгәк башына менеп, дүңгәләкләнеп уралды, унан ҡойроҡ яғында бер-ике ҡат ҡалдырып, дүңгәләгенә ултырып, күтәрелде лә, һыйырҙың уң яғындағы артҡы имсәген ҡабып имә башланы.

Беҙ Коля менән йыланды үлтерергә йыйынғайныҡ, Арсентей, беҙҙе тыйып, артабан күҙәтергә ҡушты. Бер ваҡыт йыландың һөт менән тулған ҡорһағы ҡуш йоҙроҡ самаһындағы шарға әйләнде. Имсәктән ауыҙын алғас, аҙ ғына ҡыбырлағайны, тәгәрәп, еректең серек олондары араһына ҡолап төштө. Һыйыр һыу эсергә киткәс, Арсентей сыбыртҡы менән йыланға һуғыуы булды, йыландың ҡорһағы шартлап, тирә-яҡҡа һөт сәсрәне.

Ляпкин Арсентей 1941 йылда һуғышҡа Ҡашҡар ауылынан китте. Аталарының үлем хәбәрен алһалар ҙа, Николай әсәһе Аграфена менән һуғыш бөткәнсе Ҡашҡарҙа йәшәне. Коля 3-сө синыфтан етенсегә тиклем башҡортса уҡыны. Аҙаҡ Самарскийҙа шоферҙар курсын тамамлағас, Петровкаға ҡайтып киттеләр.

Шулай итеп, беҙ Коля менән ошондай ғәжәп хәлдең шаһиты булдыҡ.

**Хәмзә ҠАШҠАРОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**

**РЕДАКЦИЯНАН ӨҪТӘМӘ:**

**Туҙбаш – беҙҙә киң таралған йылан. Уны башының ике яғындағы сағыу һары таптарынан танып була. Оҙонлоғо 1,5 метрға етеүе ихтимал, ғәҙәттә беҙҙә ундай оҙондары осрамай. Ул дымлы, еүеш урындарҙы төйәк итә, һыу буйҙарында, хатта мөгәрәптәрҙә һәм баҙҙарҙа ла йәшәй, бергә ойошоп, йомғаҡ булып та яталар. Туҙбаштар еүеш урындарҙа 6 – 30-лап бөртөк йомшаҡ тышлы йомортҡа һалалар, уларҙан 15 сантиметрлыҡ балалары сыға һәм шунда уҡ үҙаллы йәшәй башлайҙар. Йыландар һыуҙа ла һәйбәт йөҙә, һыу төбөнә лә төшөп ята ала. Улар күпселектә тәлмәрйен, кеҫәрткеләр, ҡуңыҙҙар, сысҡандар менән туҡлана, ҡорбанын терелэй йоталар. Төрлө халыҡтарҙа туҙбаш йыландарҙың һөт яратыуы, һыйырҙарҙың еленен имеүе тураһында риүәйәттәр һаҡланған. Ундай йыланды үлтерергә ярамай тигән ырым бар.**

**Бер үк темаға бер-бер артлы ике авторҙан мәҡәләләр килеп төшкәс, икеһен дә донъяға күрһәтергә булдыҡ.**




# БӘЙҒӘМБӘР ТАШЫ

Беҙҙең донъябыҙ бик серле. Уның әле лә асылып бөтмәгән мөғжизәләре бар.

Асылғандарының тарихы өйрәнелә, тәбиғи ҡомартҡылар тип иғлан ителә, һаҡ аҫтына алына. Шул тәбиғи ҡомартҡылар араһында мине бигерәк тә таштар донъяһы арбаны.

Беҙгә күрше ятҡан Ҡаҙырша ауылынан ике саҡырым алыҫлыкта, Бирмәҫ йылғаһы буйында ҡаялы тау итәгендәге таштарҙа кеше эҙҙәре бар. Бер эҙ һул аяҡтыҡы, икенсеһе уңдыҡы. Ҡыһылан менән Сумаҡай тауы араһында торған Бәйғәмбәр ташын изге урын тип иҫәпләй яҡташтарым. Өлкәндәр һөйләүенсә, башҡорт бәйғәмбәрен кафырҙар ауыл яғынан шул тау яғына баҫтырған. Ул, оҙон-оҙон аҙымдар менән йүгереп килеп, тау итәгендәге ике ташҡа баҫҡан да, тау башына һикергән. Шуға күрә ике эҙе тау итәгендә, тағы берәүһе тауҙың башында ҡалған.

Был Бәйғәмбәр ташы тураһында икенсе легенда ла бар. Ҡасандыр бер Зилзилә тигән көслө, эҫе ел иҫкән. Шул ваҡытта таштар күпереп, һабын шикелле ҡайнап ятҡан. Ошо ваҡытта бәйғәмбәр ергә төшкән, имеш, һәм, һауаға күтәрелгәндә, ошо таштарға баҫып күтәрелгән, ти. Эҫе ел тымғас, таштар ҡайнауы баҫылған. Ә бәйғәмбәр баҫҡан урында аяҡ эҙҙәре ятып ҡалған. Шунан башлап был таштарҙы Бәйғәмбәр ташы тип йөрөткәндәр.

Элек Бәйғәмбәр ташының итәгендәге эҙле таштарҙы, мал-тыуар инеп йөрөмәһен өсөн, хатта киң генә итеп кәртәләп тә ҡуйған булғандар. "1946 йылдар тирәһендә уның имән бағанаһы ғына ултыра ине", – тип иҫләй ауылдың аҡһаҡалы Нуретдин олатай Игебаев. Заманында данлыҡлы Мөжәүир хәҙрәт тә Бәйғәмбәр ташын килеп күреп, намаҙ уҡып киткән.

Үткән йылда яҡташтарым изге эш башҡарҙы. Күрше Хәйбулла районы халҡы менән бергә Бәйғәмбәр ташының тирә-яғын сүпсәрҙән таҙартты, юлдарҙы тәртипкә килтерҙе, ә таштың үҙен кәртәләп ҡуйҙылар, ҡоҙоҡ та эшләнеләр, ял итеү урыны ла бар. Йәй көнө республикабыҙ Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов составындағы делегация ла был иҫтәлекле урында булып китте. Президентыбыҙға иҫтәлеккә Бәйғәмбәр ташының фотоһүрәттәре бүләк ителде.

Элек-электән юлдан үтеп йөрөүсе кешеләр шул таш эргәһендә туҡталып китә хәҙер Бәйғәмбәр ташынан кеше өҙөлмәй: ҙур аяҡ эҙенә сәскә, еләк, муйыл, тәңкәләр, бик булмаһа, матурыраҡ таш киҫәге булһа ла һалып уҙалар. Хәҙер ҙә был йола һаҡлана.

Ғөмүмән, ошоноң кеүек ҡомартҡыларыбыҙҙың барыһы ла хөкүмәтебеҙ тарафынан иҫәпкә алынырға һәм һаҡланырға тейеш. Еребеҙҙе, изге урындарыбыҙҙың ҡәҙерен беләйек!

**Лилиә ӘХМӘРОВА.**
**Йылайыр районы,**
**Ашҡаҙар ауылы.**

* * *

Йылайыр районы тәбиғәте һоҡландырғыс төбәктәргә бай. Шуларҙың береһе Ҡаҙырша ауылы аша ағып үткән Бирмәҫ йылғаһының бер-ике саҡрым самаһы түбәнерәк яғындағы Ҡыһыланташ итәгендә ятҡан ҙур яҫы таш. Уның өҫтөндә асыҡ булып кеше аяғы эҙҙәре күренә. Ҡая таштың итәгендә яҫылығы бер метр, оҙонлоғо өс метр самаһы ҙурлыҡтағы яҫы ташта ике аяҡ эҙе уйылып ҡалған. Сама менән ун һигеҙ сантиметр оҙонлоғондағы эҙҙәр.

Бик эҫе ваҡытта, Хоҙай ҡөҙрәте менән, бәйғәмбәр үҙенең барлығын белдереп, эҙ ҡалдырған, тиҙәр. Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең хәҙисе буйынса кешелек барлыҡҡа килгәне бирле Хоҙай тәғәлә ергә 124 мең бәйғәмбәрен ебәргән икән, әлеге хәлдең һис шикһеҙ булыу мөмкин. Бындай урындар, әүлиә ҡәберҙәре башҡорт ерендә ифрат күп, сөнки был яҡҡа Хоҙай үҙенең ҡолдарын ебәреп, улар аша халыҡты һәм ошо ерҙәрҙе һаҡларға теләгән. Мөжәүир хәҙрәт тә: "Ерем-һыуым мәңгелек булһын. Мәңге ахырзаман ғәрәсәтен күрмәһен. Халҡым көсәйһен. Башҡорттар араһында донъяла эҙ ҡалдырыр данлы заттар, әүлиәләр, ғилем, аҡыл эйәләре үҫеп сыҡһын", – тип әйтеп ҡалдырған. Тимәк, был төбәктә данлы заттар, дин әһелдәре йәшәгән, тип фекер йөрөтөп була.

**Зөһрә БУЛАТОВА.**
**Йылайыр районы,**
**Һабыр ауылы.**

**Фотолары 16-сы биттә.**

«Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...» Ш. Бабич



# Бәйғәмбәр ташы





Йылайыр районының Ҡаҙырша ауылы янындағы таштарҙа ап-асыҡ булып ярылып ҡалған кеше эҙҙәре бар. Ул эҙҙәргә нисә быуат барҙыр һәм нисек улар ташта һаҡланып ҡалған – был турала төрлө фараздар бар. Ул риүәйәттәр ҙә халыҡ араһында йәшәй, был урын шулай уҡ изге төбәккә әйләндерелгән.

Бәйғәмбәр ташы тураһында ентеклерәк шул яҡ балаларының яҙмаларынан “Төйәгем тарихы” рубрикаһында уҡығыҙ.






„АМАНАТ" журналы
ЙОНДОҘЛОҒО
2010
А
Л
Т















## Volkswagen Polo Sedan

35 йыллыҡ шанлы тарихы булған “Polo” маркаһының Калугала Рәсәй өсөн махсус сығарылған өлгөһөн дә Германияның “Volkswagen” фирмаһы “Поло” тип атарға ҡарар иткән. Асылда ул элекке ҡәрҙәштәренән байтаҡҡа ҙурыраҡ итеп һәм Рәсәй юлдары өсөн, бюджет автомобиле итеп сығарыла. Бер аҙ ҙурайыуы арҡаһында салоны ла иркенерәк, багажнигы ла ҙурыраҡ килеп сыҡҡан. Бензинда эшләүсе 105 ат көслө моторы 100 саҡырым тиҙлеккә 10 секундта еткерә. Ул беҙҙең баҙарҙа “Форд фокус”, “Лада приора” кеүек автомобилдәр рәтен ауларға тейеш. Тик сифаты ғына немецтарҙыҡы буласаҡ – ябай ҙа, ышанысլы ла, тип ышандыра етештереүселәр. Калугала йыйылғанға күрә, был машинала байтаҡ ҡына Рәсәйҙә сығарылған деталдәр файҙаланыла.

## «Аманат» коллекцияһы



## Искәндәр

2007 йылда етештерелә башлаған яҡын араға атыусы был оператив-тактик комплексы НАТО-ла “SS-26 Stone” атамаһын алған. Ул 3800 килограмлыҡ кассета, фугас йә үтә тишеүсе снарядты 280 саҡырымға 30 метр теүәллек менән тоҫҡап ата, асылда алыҫ артиллерия хеҙмәтен үтәй. Кәрәк булһа, был комплекс 2 мең саҡырымға атыусы ҡанатлы ракеталар менән дә ҡоралландырыла ала.

“Искәндәр” алты техник берәмектән тора: команда-штаб машинаһы, тәьмин итеү машинаһы, ҡоролма үҙе, снарядтар ташыу машинаһы, мәғлүмәт әҙерләүсе пункт машинаһы, техник хеҙмәтләндереү машинаһы (өс күсәрле “КамАЗ” һәм дүрт күсәрле “Ураган” базаларында).

Комплекс Грузияға ҡаршы алып барылған биш көнлөк һуғыш ваҡытында файҙаланылды һәм үҙен яҡшы яҡтан күрһәтте.











# Алтынай

**Башҡорт була тороп та ауыҙ асып башҡортса бер һүҙ әйтә алмаған йәштәребеҙҙе күреп күңел ҡырыла. Теленән оялған кеше халҡы тарихын, мәҙәниәтен, моңон белмәй. Әммә, Аллаға шөкөр, ысын башҡорт рухлы, илебеҙ данын яҡларҙай йәш быуын вәкилдәре лә бар әле. Оҙон толомло, оскон ҡарашлы, үткер һүҙле һәм зирәк ҡаракай башҡорт ҡыҙы Алтынай Юнысова менән аралашҡандан һуң быға тағы бер тапҡыр инандым.**

Алтынай үҙе – Өфө ҡыҙы. Ҡала мөхитендә үҫһә лә башҡортса таҙа һөйләшә. “Башҡорт теленә һөйөүҙе ата-әсәйем, уҡытыусыларым тәрбиәләне”, – ти ул.



Һылыуҡайыбыҙ бала сағын, тәү тапҡыр сәхнәгә аяҡ баҫыуҙарын көләп иҫкә ала. Бәләкәй генә ҡыҙсыҡ Наталья Орейроны, Гөлдәр Ишҡыуатованы, Гөлсөм Бикбулатованы ҡабатлап, оҙон юбка кейеп, көҙгө алдында бөтөрөләргә яратҡан. Ә инде әсәһе Н. Сабитов исемендәге 1 –се музыка мәктәбенең думбыра класына биргәс, бөтөнләй баҙап ҡала. Әммә әкренләп уҡытыусыһы Гөлниса Хөсәйен ҡыҙы уның күңелендә думбыраға һөйөү уята. Әле Алтынай думбыра менән үҙе яҙған ҡобайырҙарҙы башҡара.

З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының театр бүлегенең II курсында ғына уҡыуына ҡарамаҫтан, Алтынай Юнысоваға Башҡорт дәүләт драма театрында уйнау бәхете лә тейә. “Шәүрәкәй” спектаклендә Сатираны башҡара. “Артылыш” тапшырыуында ла эшләп алырға өлгөргән. Буш ваҡытында шиғырҙар, ҡобайырҙар яҙа, думбырала уйнай.

Алтынай ҡобайырнәсихәттәр аша тиҫтерҙәренә һүҙен еткереү маҡсаты менән янып йәшәй. Ҡобайырҙы заманса стилгә һалып, пластика, вокал өҫтәп башҡарғанда, уның халыҡҡа тәьҫире көслөрәк булыр ине, тип һанай ул. “Махсус эффект, заманса башҡорт костюмдарының әһәмиәте лә ҙур. Шулай уҡ ҡобайырҙы джаз стиленә һалып ҡарарға ла мөмкин”, – ти йәш йондоҙ. Алтынай үҙенә сәхнә костюмдары тектереү өсөн дизайнер игеҙәк әхирәттәре Хамматоваларға мөрәжәғәт итә.

Ятҡан таш мүкләнә, йөрөгән таш шымара, ти халыҡ мәҡәле. Һәр кем үҙ мөмкинлектәрен ваҡытында аса белергә тейеш. Йәштәргә юл һәр ваҡыт асыҡ булмаһа, талантлар гөл кеүек һулып юҡҡа сығасаҡ, тигән фекерҙә һылыуҡай.

Алтынай һүҙ аҙағында журнал уҡыусыларға уй-теләктәрен еткерҙе:

“Киләсәктә сәхнә юлынан китергә теләгәндәр шуны иҫтән сығармаһын ине – эш матур күлдәктә, аҡсала ғына түгел. Төплө репертуар туплап, рухи яҡтан да, физик яҡтан да стиль уйлап ҡына сәхнәгә сығырға кәрәк. Сәхнә – реаль тормоштоң көҙгөһө, уға күңел донъяһына ҡараған кеүек ҡарарға кәрәк. Йырлаған өсөн аҡсаңды алдың да, ҡайтып киттең түгел...”

**Нәркәс АЛСЫНБАЕВА яҙып алды.**

**Уңыштары:**

**“Урал батыр” конкурсында “Аҡмуллаға әйәреп...” нәсихәттәре менән 3-сө урынды яулай.**

**1-се Асыҡ сәсәндәр бәйгеһенең республика турында “Башҡортостан” ҡобайыры менән дипломант була.**

**“Аҡмулла вариҫтары” бәйгеһендә Гран-приға эйә була.**

**Сибай ҡалаһында үткән “Ырыу һылыуҡайы”нда 1-се урын ала.**

**Нефтекамалағы Бөтә Рәсәй музыканттар конкурсының халыҡ инструменттары бүлегендә Гран-при яулай.**

**Санкт-Петербургта үткән “Арлекин” фестивалендә Башҡортостан вәкилдәре менән “Иң шәп һәм саф бейеүҙәр” номинацияһында еңеп ҡайталар.**

**1-се Асыҡ төрки “Бишбармаҡ” хип-хоп фестивалендә дипломант була.**

**Хыял иткән роле:**

**“Салауат йыйынында” ниндәйҙер бер көскә, тылсымға эйә булған Әминә ролен башҡарыу.**

**Йәшәү девизы:**

**Тырышҡан – ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.**

“Аманат” йондоҙлоғо

# Улар Изге Ҡөрьәнде яттан уҡый



Изге Ҡөрьән уҡыусыларҙың асыҡ республика конкурсы быйыл ун беренсе тапҡыр ойошторолдо. Бәйгелә ололар ҙа, балалар ҙа ҡатнаша. Әлегеһенә лә Башҡортостандың район-ҡалаларынан, күрше Татарстан Республикаһынан, Ҡурған өлкәһенән 200-ҙән артыҡ бала йыйылды. Ярыш Ағиҙел йылғаһы буйлап өс сәғәтлек сәйәхәткә сыҡҡан теплоходта үтте.

Ҡатнашыусылар өс төркөмгә бүленде. Бәйге шарттары буйынса, 7 йәшкә тиклемгеләр Ҡөрьәндең “Фил” сүрәһенән алып “Нәс” сүрәһенә хәтлем, 7 – 12 йәшлектәр “Фәджр”ҙан “Нәс”кә тиклем, 12 – 16 йәшлектәр “Амма” джузын* яттан белергә тейештәр.

Сығыштарҙы Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсә мөғәллимдәре, районларҙан килгән хәҙрәттәр, имам-хатибтарҙан торған тәжрибәле жюри ағзалары баһаланы. Сүрәләрҙе дөрөҫ, асыҡ әйтеп, матур итеп көйләп уҡыуға ҙур иғтибар бирелде.

Бәләкәстәр араһында Туймазы ҡалаһынан 5 йәшлек Мансур Вәлитов беренсе урын яуланы. 7 – 12 йәшлектәр араһында еңеүсе – 7 йәшлек Әҙилә Хәйруллина. Ул Стәрлебаш районының Йәшергән ауылынан. Биш йәшенән ғәрәпсә уҡый-яҙырға өйрәнә, намаҙға баҫа башлаған Әҙилә 32 сүрәне ятҡа белә.

12 – 16 йәшлектәр араһында Аҫҡын районынан Айһылыу Ғәйнелйәнова беренсе урынға сыҡты. Ҡыҙ Солтанбәк мәктәбендә белем ала. Ғәрәпсә уҡырға-яҙырға үҙҙәренең ауылындағы мәсеттә үткән дәрестәрҙә өйрәнгән. Дин дәрестәрен әсәһе Нәсимә апай алып бара икән. Атаһы ла, ҡустыһы ла динлеләр.

– 8 йәштән намаҙға баҫтым. Көн һайын биш рәкәғәт намаҙҙы ҡалдырмайым, – ти Айһылыу. – 10 йәштән мосолманса кейенеп йөрөйөм. Тәүҙә башҡалар ҡырыныраҡ ҡараған һымаҡ ине, хәҙер өйрәндем. Бындай конкурста тәүгә ҡатнашыуым. Беренсе урын алырмын, тип уйламаған да инем.

Йөҙөнән иман нуры бөркөлөп торған ҡыҙ киләсәктә дингә бәйле һөнәр һайларға уйлай. Һигеҙенсе синыфты тик яҡшы билдәләргә генә тамамлаған. Инсафлы, тәртипле, шул уҡ ваҡытта тырыш та булыуы тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итер, иншалла.




Беренсе урынды яулаусыларға – нетбук һәм Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты дипломы, икенсе-өсөнсө урынды алыусыларға ла дипломдар һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды.

Теплоходта төрлө уйындар, викториналар ҙа ойошторолдо. Ҡыҫҡаһы, балалар ярышып ҡына ҡалманылар, ә рәхәтләнеп ял да иттеләр, тәмлекәстәр менән дә һыйландылар.

Конкурста ҡатнашыусыларҙың һаны йылдан-йыл арта, ти ойоштороусылар. Был бик ҡыуаныслы хәл. Малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың насар ғәҙәттәрҙе үҙ итмәй, иманға тартылыуҙары һөйөндөрә.

**Айгөл ҒӘБИҘУЛЛИНА.**
**Ләйлә ЗАКИРОВА фотолары.**
**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Айһылыу Ғәйнелйәнова; еңеүсе малайҙар.**

*** Джуз – бүлек тигәндә аңлата. Ҡөрьәндә 30 джуз. “Амма” – шуларҙың иң аҙаҡҡыһы. Ул 78-114-се сүрәләрҙе үҙ эсенә ала.**



# ОҘАҠҠА КИЛГӘН ҠУНАҠ




Ҡунаҡ көҙөрө өс көн, ти башҡорт халҡы. Унан һуң ул муйнаҡҡа әйләнә, артабан нисек ҡотолорға ла белеп булмай. Кешеләргә генә түгел, тәбиғәттәге һәр нәмәгә ҡағыла был. Мәле һәм миҙгелен белмәй йуған ямғырҙан да ялҡып кителә бит.

Беҙҙең илгә саҡырылмай һәм бик оҙаҡҡа килгән ҡунаҡтарҙың береһе – барыһына ла билдәле колорадо ҡуңыҙы. Уның тыуған төйәге – Мексиканың төньяғы һәм АҠШ-тың көньяҡ өлөшө. Ул шунда, беҙҙә йәшәгән бихисап ҡуңыҙҙар һымаҡ уҡ, тәбиғәттең бер өлөшө булып быуаттар буйы йәшәгән. Кимерергә япраҡтары булған, уларҙың үҙҙәрен ашарға әҙер ҡоштар ҙа бөтмәгән. Шуға тыуған төйәктәрен ташлап китеү был бөжәктәрҙең уйҙарына ла керөп сыҡмаған.

Әммә кешелек күпләп картуф үҫтерергә тотонған. Был техник культура һәм тәмле ризыҡ та булған үҫемлек тә бар донъяға йылдам таралып, тарихты белһәгеҙ, XIX быуатта башҡорттар араһына ла килеп керә. Ә хәҙер уны үҫтермәгән хужалыҡ та юҡ.

Үҙенең яратҡан ризығы булған икһеҙ-сикһеҙ картуф баҫыуҙары күркәм ҡуңыҙ өсөн ерҙәге ожмах ҡына була. Ул шундай йылдам үрсей башлай, артынан донъялағы бар ҡоштар ҙа сүпләп өлгөрә алмаҫ ине. 1959 йылда был ҡуңыҙҙың һөжүменән АҠШ-тың Колорадо штатында барлыҡ картуф плантациялары һәләк була һәм аяуһыҙ ҡороткос колорадо ҡуңыҙы исемен ала.

Арыу ғына оҫҡан, һалҡынға ла бирешмәгән был ҡуңыҙ, тейешле плацдарм яулап, кеше тыуҙырған уңайлы шарттарҙы файҙаланып, донъя буйлап сәйәхәткә сыға.

1918 йылда ул карантарҙағы йөк менән Францияға килеп эләгә. 1922 йылда, бик күпләп зыян итә башлағас, уға ҡаршы яу асалар. Әммә ваҡыт уҙған була, океан аша сыға алған бөжәкте ҡоро ерҙә һин тыйып ҡара! Беҙгә ул уҙған быуаттың 80-се йылдарында килеп етте. Баҡсалар өсөн ул афәттең үҙе ине! Әйткәндәй, алыҫта ҡалған тыуған ерендәге ғәҙәтен һаҡлап, ул беҙҙә лә тик картуф һәм уның туғаны помидор япрағы менән генә туҡланыуын дауам итә. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ әле: әгәр ҙә ул саранча һымаҡ һәр йәшел нәмәгә ташланһа?..

Әммә тәбиғәттә бер ни ҙә оҙаҡҡа өҫтөнлөк яулай алмай. 2000 йылдарға беҙҙә лә ҡуңыҙҙы “ауыҙлыҡларлыҡ” саралар табыла башланы. Хәҙер, асылда, колорадо ҡуңыҙын береһе лә ҙур хәүеф тип һанамай. Өҫтәүенә, беҙҙең шарттарҙа уның үҙен ашаусы “дуҫтары” ла, йоморткаһы менән туҡланыусылар ҙа, хатта үҙ сирҙәре лә килеп сыҡты.

Әлбиттә, бер килгәс, ул беҙҙең мөхиттең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып ҡаласаҡ, уны ҡырып бөтөрөп булмаясаҡ. Ә күпләп үҫтерелгән моноплантацияларҙа (картуф һәм помидор түтәлдәрендә) уның менән көрәшерлек химик препараттар хәҙер етерлек.

Әлегә колорадо ҡуңыҙы яулай алмаған берҙәнбер ил – Бөйөк Британия. Быға, берҙән, бик көслө карантин сәбәпсе булһа (әйткәндәй, төрлө үҫемлектәргә, бөжәктәргә һәм хайуандарға махсус карантиндар системаһы күп илдәрҙә эшләй), икенсенән, Бөйөк Британияның дымлы һәм ҡырыҫ климаты ла уға бигүк килешеп етмәй. Тыуған ере эҫе яҡ икәнен онотмағыҙ.



## Белешмә өсөн:

Колорадо ҡуңыҙы, айыу һымаҡ, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ запасы туплап, ергә бер метр тәрәнлегенә тиклем инеп йоҡлай. Яҙын сыҡҡас, былтырҙан ҡалған ҡалдыҡтар менән хәлләнеп ала ла, үҫеп сыҡҡан йәш япраҡтарҙың аҫ яғына 350-гә тиклем йомортҡа һала. Йылдам үҫкән ҡарышлауыҡтары ергә төшөп курсаҡҡа әйләнә. Унан ҙур ҡуңыҙ сыға. Колорадо ҡуңыҙы күсенгән ваҡытта тәүлегенә бер саҡырым ара үтә. Көслө елдәргә эләкһә, был ара йөҙәр саҡырым булып китә!



# ҮЛӘН ҠУРАЙ – ДОНЪЯЛАҒЫ ИҢ БОРОНҒО МУЗЫКА ҠОРАЛДАРЫНЫҢ БЕРЕҺЕ



Малай саҡта һәр кем һыҙғырыҡтыс эшләп ҡарай. Уны бик күп төрлө нәмәнән яһап була: акация емешенән, ағас ботағынан, нәҙек көпшәнән... Ә бына башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы булған ҡурайҙың шулай уҡ көпшә үлән икәнен хәҙерге быуын онотоп та баралыр инде. Сөнки уны табыуы, бигерәк тә музыкаль инструмент кимәленә еткереп эшләүе еңел түгел. Өҫтәүенә, ағастан (шпон) ҡурайҙы әҙер үлсәм (шаблон) буйынса яһайҙар һәм уның тауышы нисек булырын алдан белергә мөмкин. Ә бына үләндән яһағанда, эшләнәсәк ҡурайындың ниндәй тауышлы килеп сығырын фаразлауы ҡыйыныраҡ. Шуға үлән ҡурайҙы хәҙер бик һирәк кенә оҫталарҙа осратырға мөмкин.

– Ҡайҙа үҫтең?
– Урманда үҫтем...
– Кем ҡырҡты?
– Оҫта ҡырҡты.
– Нишләргә?
– Уйнарға.



Шулай һөйләшеп, тигеҙ һәм шыма көпшәнән һигеҙ тотам үлсәп алаһың. Тағы ярты тотам ҡалдырып, осон ҡырҡып ташлаһаң, һигеҙ ярым тотам оҙонлоғо – кеше буйына яраҡлаштырылған оҙонлоҡ килеп сыға. Шуның осонан дүрт иле (дүрт бармаҡ яҫылығы) ҡалдырылып, беренсе тишек уйыла. Тишектәрҙе бармаҡ менән баҫып ҡапларлыҡ итеп яһарға кәрәк. Беренсеһенән өсәр иле аша барлығы дүрт тишек яһала. Һуңғыһынан тағы ла дүрт иле үтеп, аҫ яғынан тағы бер тишек яһала.



Артабан инде, әйҙә, уйна ҡурайында, башҡорт балаһы!



Әммә уны тауыш сығарырлыҡ итеп эшләүе әллә ни ҡыйын түгел. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһыНоғман Мусиндың "Мәңгелек урман" романында уны нисек эшләү ысулы яҡшы һүрәтләнә:

– Ҡурай?
– Әү.






11 йәш. Йырларға, бейергә яратам. Тиҫтерҙәрем хат яҙһа ине.
**Шайморатова Гөлназ.**
**453036, Архангель районы,**
**Көмәрле ауылы,**
**Шайморатов урамы, 17.**
**Т.: 89632370660.**

***

11 йәш. Ҡуҙы. Музыка тыңларға, китап уҡырға яратам. 11 – 12 йәшлек ҡыҙҙар хат яҙһа ине.
**Зарипова Эльвира.**
**453418, Дәүләкән районы,**
**Мәкәш ауылы, Бәхет урамы, 9.**

***

10 йәш. Балыҡ. Һүрәт төшөрәм. 10 – 12 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Хәйбуллина Таңсулпан.**
**453185, Стәрлебаш районы,**
**Йәлембәт ауылы, Мәктәп урамы, 16.**

***

12 йәш. Буға. Йәштәштәремдән хат көтәм. Шөғөлдәрем тураһында хатҡа яҙырмын.
**Мырҙабулатова Әлиә.**
**453391, Ейәнсура районы,**
**Башҡорт Самаҙы ауылы, Яр буйы урамы, 8.**

***

15 йәш. Йәштәштәремдән хат көтәм.
**Уразаева Нәзифә.**
**453330, Күгәрсен районы,**
**Ибраһим ауылы, Шакир Янбаев урамы, 73.**
**ICQ: 389794895.**

***

12 йәш. Буға. Шөғөлдәрем тураһында хатҡа яҙырмын. 12 – 13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Бикәнова Гөлнәфис.**
**453391, Ейәнсура районы,**
**Ҡужабаҡ ауылы, Совет урамы, 2.**

***

16 йәш. Ҡыҫала. Шиғыр яҙырға, китаптар, гәзит-журналдар уҡырға әүәҫмен. 15 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс-хәбәр, шылтыратыу, хаттар көтәм.
**Насирова Айгүзәл.**
**453067, Ғафури районы,**
**Юлыҡ ауылы, Мәктәп урамы, 23.**
**Т.: 89603878516.**

***

Мин Күсмәева Зөлфиә булам. 13 йәш. Буш ваҡытта китап уҡырға, әсәйемә ярҙамлашырға һәм дуҫ-иштәрем менән аралашырға яратам. 13 – 15 йәшлек ҡыҙҙар һәм малайҙарҙан смс-хәбәр көтәм.
**ICQ: 632703954.**
**Т.: 89033128015.**

12 йәш. Ылаҡ. Тыуғын көнөм 4 ғинуар. Буш ваҡытта китап уҡырға, музыка тыңларға, бейергә яратам. 12 – 14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Шиһапова Гөлназ.**
**453396, Ейәнсура районы,**
**Яңыбай ауылы, Арал урам, 1.**

***

12 йәш. Һыуғояр. Буш ваҡытта китап уҡырға, волейбол уйнарға яратам.
**Ғәйфуллина Айгизә.**
**452563, Мәсетле районы,**
**Айып ауылы, Әй урамы, 19.**

***

Резедаға ла, Нурзиәгә лә – 13 йәш. Йырларға, бейергә, бәйләргә яратабыҙ. 13 – 15 йәшлек ҡыҙҙар һәм малайҙарҙан хат көтәбеҙ.
**Юлдашева Резеда.**
**453625, Әбйәлил районы,**
**Амангилде ауылы, Комсомол урамы, 7.**
**Т.: 83477225131.**
**Вәлиева Нурзиә.**
**Комсомол урамы, 5.**
**Т.: 89649609925,**
**83477225356.**

***

13 йәш. Ҡыҙ. Китап уҡырға, бәйләм бәйләргә яратам, шиғырҙар яҙам. 12 – 14 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәр хат яҙһа ине.
**Teләүморатова Илүзә.**
**Ейәнсура районы, Байыш ауылы, Үҙәк урам,75.**

***

12 йәш. Һыуғояр. Буш ваҡытта китап уҡырға, волейбол уйнарға яратам.
**Ғәйфуллина Айгизә.**
**452563, Мәсетле районы,**
**Айып ауылы, Әй урамы, 19.**

*Ҡәҙерле дуҫтар! Бөгөндән башлап, журналда яҡындарығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә СМС-сәләмдәрегеҙҙе баҫтыра алаһығыҙ. Быны өсөн 3443 номерына смс ебәрегеҙ. Тик хәбәрҙе яҙғас, “Хат” префиксын ҡуйырға онотмағыҙ.*




# ҺӨТАЙ ҺЫЛЫУЫ



**Мин – Айгөл Абдрахманова. Мәсетле районының Мәсетле ауылынан булам. Бейергә, йырларға, һүрәт төшөрөргә бик яратам. Мәктәптә үткән сараларҙа ихлас ҡатнашам. “Аманат” журналын һәр саҡ көтөп алам.**



**Лилиә Солтанова, Әбйәлил районының Рауил ауылынан:** “Яраткан шөғөлдәрем – бәйләү, сигеү, китап уҡыу, шиғыр, әкиәттәр ижад итеү. Төрлө ярыш, конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулағаным бар. Киләсәктә журналист йә диктор булырға теләйем.”



**Рузилә Иҙелбаева, Күгәрсен районының Теләүембәт ауылынан:** “Бейергә, йырларға, ҡул эштәре менән шөғөлләнергә яратам. Төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнашам, спортты ла үҙ итәм.”



**Гөлдәниә Хөсәйенова, Ейәнсура районының Яңыбай ауылынан:** “Бейергә, йырларға, бәйләргә әүәҫмен. Яраткан девизым – һәр саҡ алға!.”



**Дарья Буднева, Сибай ҡалаһынан:** “Мин бик алсаҡ, шаян, тырыш ҡыҙмын. Дуҫтарым да күп, сөнки кешеләр менән аралашырға яратам. Киләсәктә дизайнер, стилист булып, матурлыҡ салоны асыу тураһында хыялланам.”

# ТЕРҺӘКТЕ ТЕШЛӘРҘӘЙ БУЛАМ ДА...




**Бик оҙаҡ уйланғандан һуң, хат яҙырға булдым. Үҙем менән булған хәлде һөйләгем килә, бәлки, икенсе ҡыҙҙар мин яһаған хатаны эшләмәҫтәр, фәһем алырҙар, тип уйлайым.**

**Мин – ябай ауыл ҡыҙы. Ҡалала мәктәптә уҡып йөрөйөм. Шәмбе еттеме, ауылға ҡайтам һәм иптәш ҡыҙҙар менән уйынға сығабыҙ. Башҡа үҫмер ҡыҙҙарҙың һымаҡ минең дә дуҫ егеттәрем күп булды, тик күңелгә ятҡаны ғына осраманы.**

Көҙ. Сентябрь айы. Мине Р. исемле егет оҙата килде. Иң беренсе былай ғына йөрөйөм тип уйланым, улай уҡ иҫем дә китмәне. Ҡыш еткәс, ул миңә ҡарата һалҡыная башланы. Уны ташланым. Шул ваҡыт уны яратыуымды аңланым. “Ниңә генә ташланым икән?” – тип уйлай башланым, төндәр буйы илай торғайным. Шул саҡ татый башланым инде һыраһын да, тәмәкеһен дә. Тәмәкене шунда уҡ ташланым, ә уйынға сыҡҡанда һыра эсеү минең өсөн бер ни тормай ине.



Бер көндө Р. иҫерек башы менән янъыма килде. “Әгәр минең менән йоҡлаһаң, һинең менән йөрөйөм,” – тине. Әлбиттә, ризалашманым. Көндәр үтә торҙо, мин уны онотҡандай булдым.

Июль айы. Ауыл йәштәре бер көн йыйылышып яланға сығырға булды. Киске 11-ҙә йыйылдыҡ та, йылға буйына киттек. Был көн Р.-ның дипломын йыуа инек. Мин дә эстем, күп кенә төшөрөп ташланым. Музыка ҡуйҙылар, Р. талғын бейеүгә саҡырҙы. Бейеп йөрөгәндә ул мине үбә башланы. Йыр бөткәс, “алдағы талғын бейеүгә тиклем,” – тине. Артабан уның менән нисек һөйләшеп киткәнде иҫләмәйем. Ул мине ҡултыҡлап алды ла, ағастар янына алып китте. Ул яҡҡа барғанда аңым ныҡ томаланғайны. Артабан аңлайһығыҙҙыр нимә булғанын... Был көндө ул мине оҙатманы ла. Саҡ-саҡ өйгә ҡайтып еттем. Икенсе көн уйынға сыҡтым. Ул клубта юҡ ине, күрше ауылға киткәнен әйттеләр. Мин бер ни аңламаным. Өсөнсө, дүртенсе, башҡа көндәрҙә лә шул уҡ хәл. Түҙмәнем, телефонына шылтыратып: “Р.! Һөйләшергә кәрәк!” – тинем.

Шул көндө ул айныҡ ине. Клуб артына киттек. Уның менән беренсе тапҡыр асыҡтан-асыҡ һөйләштек. “Икенсе ҡыҙың бармы?” – тинем. “Мин белмәйем, бер ни аңламайым, буталдым,” – тине Р. “Ниңә һин минең менән улай эшләнең?” – тигәс, “Белмәйем, шулай килеп сыҡты,” – тине. “Һин минең менән артабан йөрөйһөңмө?” – тип күҙҙәренә баҡтым. “Юҡ. Һинең менән йөрөй алмайым. Ниңә мин һиңә? Эсәм, тартам. Тиҙ генә ғашиҡ булыусанмын. Бер ауылға барһам, бераүгә күҙем төшә, икенсеһенә барһам, икенсе ҡыҙ оҡшай. Икенсенән, һин минән 4 йәшкә бәләкәй. Беҙҙе “йөрөй” тип ауыл әбейҙәре ғәйбәт һөйләй башлаған. Йөрөгәндә күреүҙәрен теләмәйем. Үҙеңә икенсе егет тап. Бәлки, армиянан ҡайтҡас, уйланырмын...”

... Нисек кенә үҙ янымда ҡалдырырға тырышһам да, китте ул.

Уның һүҙҙәре хаҡ ине. Мин үҙемдең ниндәй ҙур хата эшләгәнемде аңланым. Көн һайын илайым, хәҙер терһәкте тешләрҙәй булам да бит, бик һуң.

Һыра эсмәйем хәҙер. Беләм: был минеке түгел. Бына шулай мин балалыҡ менән хушлаштым.

Ул миңә ғүмерлек яра һалһа ла, һаман да Р. килер һәм беҙ бергә булырбыҙ, тип өмөтләнәм. Ә бит миңә ни бары 15 йәш. Йәшәй ҙә башламағанмын, тип әйтергә була.

Бәлки, хатымды уҡып сыҡҡас, журналға баҫтырмаҫһығыҙ ҙа, аңлармын. Бик күп насар нәмәләр яҙып ташланым, шикелле. Тик бер нәмә әйткем килә: ҡыҙҙар минең һымаҡ иҫәр булмаһындар ине.

**И.**

**Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры**

# Ҡайтып төшһәң ине...

***Атаҡлы шағир Шәйехзада Бабичҡа***



***Урал аръяғында бер ауыл бар,***
***Сал тарихтар һөйләй һуҡмағы.***
***Ошо яҡта гөлтләй-гөлтләй янған***
***Бабичтарҙың шиғри усағы.***

**Эйе, эйе... Бабичтарҙың шиғри усағының йылыһын һаҡлаған бына был ергә, бына был изгелекле төйәккә, бына был мөккәдәс Темәскә ҡабат-ҡабат урап ҡайта минең уйҙарым.**

**Бөйөк Ватан һуғышы осоронда бер туған ҡустым Хөснихаҡ менән, шулай уҡ йөҙәрләгән етем-еһер менән Баймаҡ районының Темәс балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫтем мин.**

**Темәс балалар йорто, Темәс педагогия училищеһы тигән исемдәр хәтер дәфтәремә иман нурҙары менән яҙылған.**

**Йәнә лә шуны айырым әйтеүем зарур: һөйөклө тәрбиәселәремә, уҡытыусыларыма, Темәс ауылы халҡына рәхмәттәрем ифрат ҙур.**

**Ололарҙы ололоҡлағанғалыр инде, яйы сыҡҡанда өлкәндәр эргәһендә ураландым. Уларҙың әңгәмәләшеүҙәрен, гәпләшеүҙәрен, күңел әүрәткес мәрәкәләрен, мауыҡтырғыс хәтирәләрен ҡолаҡ ҡарпайтып тыңларға әүәҫ булдым. Әйткәндәй, Шәйехзада Бабич яҙмышына бәйле хәтирәләрҙе лә мин тәүге тапҡыр Темәстә ишеттем.**

**Ана шунан бирле Шәйехзада Бабич ижады менән ҡыҙыҡһыныуым көсәйҙе, уның шиғырҙарын уҡырға уҡталдым.**

**Ләкин, үкенескә ҡаршы, шағирҙың китаптарын китапханаларҙа таба алманым. Был әсенешле тойғолар зиһенемдә зиңкетте.**

**Өлкән йәштәге инсандарҙың Шәйехзада Бабич тураһындағы иҫтәлектәрен ишеткән һайын күңелемдә һағышлы ғәм, шиғри моң осҡондары осҡонланды.**

**Мәле еткәс, ана шул һағышлы ғәм, шиғри моң осҡондары дөрләй-дөрләй янып, ялҡынланып поэтик әҫәр булып яралды.**

Һай, арҙаҡлы шағир Шәйехзада,
Ҡыңғырауҙар тағып пар атҡа,
Юл буйында көмөш моң сыңлатып,
Бер елдереп ҡайтып төшһәң ине
Беҙҙең яҡҡа, күркәм Баймаҡҡа!

Күңелкәйең һулҡып һағынғандар
Ҡоштар йырын, Саҡ, Суҡ тауышын,
Был төйәктә тыуып-үҫмәһәң дә,
Ошо ергә, ошо сал тупраҡҡа
Ереккәндер һинең яҙмышың.

Мосафирҙай аҙмы ҡыҙырҙың һин
Талашты һәм Шырҙы буйҙарын,
Йөрәккәйең янған минуттарҙа
Устарыңа алып уртлап эстең
Темәс шишмәһенең һыуҙарын.

Бәғзе ваҡыт Рапат тигән тауҙың
Ҡыраз ташҡайына ултырып,
Йөрәкһенеп шиғри мәрйен теҙҙең
Табаҡ та ғына табаҡ аҡ ҡағыҙҙың
Ап-аҡ биткәйҙәрен тултырып.
Көмөш кенә башлы, алтын ҡашлы,
Аҫыл мандолина ҡылдарын
Сиртә башланыңмы, барса кеше
Һинең сихри моңдо тыңлар ине
Алмайынса хатта тындарын.

Яғалсаның һомғол саукалары,
Һонолошоп үҫкән артыштар,
Алҡынып та аҡҡан Һаҡмарымдың
Ебәк тулҡындарын серҙәш иткән
Зифа буйлы һылыу ҡамыштар;

Һәр берене, гүйә, өнһөҙ генә
Йәдкәр һөйләй һинең турала,
Мин белмәгән бик күп хәтирәләр,
Әйтерһең дә, серле йомғаҡ булып,
Күңелемә килеп урала.

Һин айҡаған биләндәргә сыҡһам,
Мәтрүшкәләр, төрлө сәскәләр.
Гүйә, зауыҡланып-илһамланып,
Ҡасандыр бер һинән отоп алған
Таҡмаҡтарҙы ҡат-ҡат әйтәләр.

Һине юҡһыныуҙан сағылдарҙа
Һыктап иңрәй кеүек йор ҡурай,
Күк Ирәндек ҡаяһына баҫып,
Әле булһа һине көтә төҫлө
Моңдарыңа ғашиҡ ҡоралай.

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,
Ләкин, Бабич, һин бит ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилығын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң.

Ажар бөркөт һымаҡ ғорур булдың,
О, юҡ, йөрәмәнең моңайып,
Урттарыңа ҡандар төйөлһә лә,
Хәсрәтеңдә йөрәгеңә йотоп,
Йәш аралаш көлдөң йылмайып.

Ҡомһорап та сапҡан арыҫландай,
Көрәш майҙанына атлыҡтың...
Йылдар уҙған һайын, уфтандырып,
Йәнен ҡырҡҡа телгән ҡайғыһы ла,
Ғорурлығы ла һин башҡорттоң!..

Нисә тапҡыр һине үлтерҙеләр,
Күпме яуызлыҡтар ҡылдылар,
Хатта исемеңде, бөтөнләйгә
Халыҡ хәтеренән юйып ташлап,
Мәңге юҡ итмәксе булдылар!

Усал хөкөмдарҙар һәм ҡатилдар
Борондан уҡ шулай шашҡандар,
Илдең ут йөрәкле батырҙарын,
Сәсән телле мәшһүр шағирҙарын
Атҡандар, йә тотоп аҫҡандар!

Шундай аяуһыҙлыҡ һәм яуызлыҡ
Ҡабатланмаҫ тимә бөгөн дә,
Зәһәр ағыуҙарын сәсмәк булып,
Аждаһалар тулап ятмаймы ни
Яһилдарҙың йөрәк төбөндә?!

Йыр быуыла һаман, сәсәй заман,
Арта бара дошман хәйләһе...
Ә ҡайҙалыр ярһып-ужарланып,
Тағы ҡандар көҫәп йөрөй кеүек
Һине сапҡан ҡылыс шәүләһе.

Әй, самими тәбиғәтле Бабич,
Һине кем һуң, кем һуң онотор?
Әгәр онота икән, ул әҙәмдәр
Зиһен сәхрәләрен сафландырған
Рухи инештәрен ҡоротор!

Ғүмер баҡый атайсал тип яндың,
Ҡолаҡ һалдың заман ғәменә,
Ил-йортоңдоң, ете ырыуыңдың,
Армыт-армыт мәғрүр Уралыңдың
Моң-зарҙары һеңде йәнеңә.

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Мөхәббәтле шағир ҡайҙа бар?
Күңелеңдең аяҙ көмбәҙендә
Етемдәрҙең йәнен йылытырлыҡ
Ҡайнар ҡояш та бар,
Ай ҙа бар!

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Кешелекле шәхес ҡайҙа бар?
Саф көмөштәй матур йырҙарыңда
Ғашиҡтарҙың дәртен дәрләтерлек
Ихлас һөйөү ҙә бар, наҙ ҙа бар!

Мөхәмәтзакир улы Шәйехзада,
Шиғриәттең йәүһәр тажы һин,
Мәңге баш эймәгән милләтемдең
Быуындарҙан быуындарға күскән
Милли моңо, милли сазы һин!

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,
Ләкин, шағир, һин бит ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилығын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң!

Йөҙәр йылға тик бер тыуа тиҙәр
Таң ҡалырлыҡ йыр-моң маһиры,
Һинең маһирлыҡтың, оҫталыҡтың
Урал илкәйендә тамыры...
Ана шуға, Бабич, һин үлемһеҙ,
Халҡымдың һин даһи шағиры!

**1993**

**Күренекле әҙибебеҙ Абдулхаҡ Хажимөхәмәт улын бөтөн “Аманат” журналы уҡыусылары исеменән Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме ауылы менән ихлас ҡотлайбыҙ!**

# ИЛ ИЖАДЫ – АҪЫЛТАШ



## Лагерҙа

Ахмалға төшөп шырлыҡ йырғанда, лагерь урынына нисек килеп сыҡҡандарын абайламай ҙа ҡалды үҫмерҙәр. Матур ғына аҡлан, ситендә усаҡ урыны, таҡталарҙан өҫтәл яһалған, хатта әҙерләп ҡалдырылған утын да ята. Усаҡ янынан аҫта ғына шишмә сылтырағаны ишетелә. Ботаҡтар менән көпләнгән ҡыуыштың һөлдәһе лә тора хатта. Бынан һарҡыуға табан, күрәһең, ауыл яғыналыр, тап-таҡыр юл төшөп китә икән дәһә. Аҡланды үтеп, ул юл тауға менеп китә, тимәк, Ҡараташҡа була инде.

– Ура, егеттәр, бында шарттар ауылдыҡынан һис кәм түгел, – тип биштәрен өҫтәлгә ҡуйҙы Айнур.

– Яҡшыраҡ булмаһа әле, – тип тирә-йүнде өйрәнергә керешеп китте Илнур. Һәм ҡыуыштан йыраҡ булмаған шыршыға эленеп ҡуйылған сәйер нәмәләргә иғтибар итте. – Әһә, малайҙар, бында ниҙер бар…

– Нимә, нимә? – тип, уның янына Гөлнур менән Айнур йүгереп килде.

Даими лагерь урындарында һәр саҡ ҡалдырылып йөрөтөлә торған әйберҙәр тураһында уларҙың элек тә ишеткәне бар ине. Ысынлап та, шыршыға байтаҡ кәрәк-яраҡ элеп ҡалдырылғайны. Ҡыуышты ябыуға үлән сабыу өсөн булһа кәрәк, ураҡ, тимер һәнәк тә бар. Ауыр ҡапҡаслы суйын ҡаҙан эсендә быяла банкалар эсенә таҫлап тултырылған тоҙ, шырпы ла бар хатта.

– Йәшәйбеҙ, малайҙар! – тип ҡулын ыуғыланы Айнур. – Йәшәһен урман кешеләренең теләктәшлеге!

– Телефондар бында ла тотмай, малайҙар, – тип асыш яһаны Гөлнур. – Иртәгә, тау башына менеп еткәнсе, батарейкалар ултырған булыр, моғайын.

Ләкин был яңылыҡҡа ике малайҙың әллә ни иҫе китмәне. Бер ҡаршылыҡты йырып, кеше йөрөгән ергә килеп сыҡтылар ҙа инде улар. Оло юлға, тиергә лә мөмкин. Тимәк, эштәр көйлө бара!

* * *

Кис буйы усаҡ янында төнгө урман тауыштарын тыңлап ултырып, иртәнсәк улар һуң уянды. Һуң тиеүҙәре лә ҡояштың бейеклегенә генә ҡарап билдәләнә ине.

– Аңлауымса, Ҡараташ башына ошо юл менән менәләр? – тип әллә һораны, әллә үҙе өсөн бил-

(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4-се һанында донъя күрҙе)

дәләне Айнур, иртәнге сәйҙе эсеп алғас. – Артыҡ бер нәмә лә алмаҫҡа! Беҙҙең маҡсат – тау башына менеп етеү һәм төшөү. Унан ҡайтырға ла була, ауылда юғалтырҙар юғиһә.

– Тау башында тамаҡ ялғап алырбыҙ ул, төйнәйем берәй нәмә юлға, – тип мәшәкәтләнә башланы Гөлнур.– Унда һыу ҙа юҡтыр бит?

– Һыуһыҙ ярамаҫ шул, – тип һүҙ юҡтан ғына ҡушылған булды күптән юлға атлығып торған Илнур.

Тауға менгән һайын юл тарая һәм яйлап юғала барып, бер саҡ бөтөнләй бөттө лә ҡуйҙы. Беләләр үҫмерҙәр: Ҡараташ сусайып торған түбә түгел, уның тәғәйен генә иң бейек нөктәһе юҡ. Ләкин уның теге яғы ҡая ташлы, текә яр булып, Сөм йылғаһына төшә. “Ағиҙел үк булмаһа ла, һыу инерлек ятыуҙары бар”, – тип һөйләгәйне Айнурға атаһы ул йылға тураһында. Хатта үпкәләп тә ҡуйғайны әле: ”Уҡыуығыҙҙы әйтер инем: географиянан әллә ҡайҙағы Африкалағы йылғаларҙы үтәһегеҙ, ә танау төбөндә ятҡан үҙ йылғаларығыҙҙы ла белмәйһегеҙ…” Улай уҡ түгелдер, ана шуға география уҡытыусыһы балаларҙы йыл һайын тыуған яҡ буйлап сәйәхәткә йөрөтәләр инде. Айнурҙарҙың да бит бына, үҙ белдектәре менән булһа ла, тыуған яҡтарын нығыраҡ белергә тырышып ятыуҙары. Улайға китһә, нишләп атаһы ошоға тиклем уларҙы бер ҡайҙа ла алып сыҡҡаны юҡ? Эш, эш, тигән булалар ҙа ололар, был йүнһеҙ балалар ҡайҙан сыға, тип зарланаларҙыр әле. Ярай ҙа, бөтөнләй тыйып ҡуйманылар, шуныһына рәхмәт…

Бара биргәс, бөтөнләй бөтөп ҡуйған һуҡмаҡтың, дөрөҫөрәге, билдәләгән йүнәлештең, кинәт һарҡыуға ыңғайлауын абайланылар. Тик ҡаялар ҙа, аҫ яҡта киң үҙәндәр ҙә асылманы. Әммә ағастар араһында унда-бында эре таштар, хатта таш түбәләстәр ҙә осрай башланы.

– Туҡтайбыҙмы әллә? – тип шик белдерергә баҙнат Гөлнур. – Апаруҡ килдек түгелме?

– Минең ниәт икенсерәк ине, – тип туҡтап ҡалды алдан атлаған Айнур. – Сөм йылғаһына тиклем төшөп етәйек тә, унан кире менербеҙ.

– Йыраҡ түгел микән, ай-һай… – тип ҡушылды Илнур. – Ямғыр яуырға ла итә буғай.

Илнурҙың һүҙҙәрен ҡеүәтләгән һымаҡ, күктән гөрһөлдәгән тауыш килде. Гел урман эсендә йөрөгәс, балалар күкте болоттар ҡаплағанын да һиҙмәй ҡалған икән.

– Хәҙер башланасаҡ, әйҙәгеҙ, анау ҡаясыҡ төбөнә! – тип саҡ ҡына ситтәрәк күренгән таш өйөмөнә табан ашыҡты Айнур. Уның бер мөйөшөндә ҙур таш түбәлек һымағыраҡ сусайып тора ине. Барып етер-етмәҫтән эре тамсылар уларҙы бәргесләй ҙә башланы.

– Тиҙ үтер ҙә ул, тик үләнде тотош еүешләй инде, – тип һөйләнә-һөйләнә тәбиғи ҡыуышҡа иң алдан барып ингән Айнур ғәжәпләнеп ҡысҡырып ебәрҙе. – Әб-бә!..

– Мәмерйә түгелме? – тип шулай уҡ аптырашта ҡалды артынан килгән Гөлнур. Илнур ҙа ниҙер әйтмәй ҡалмаҫҡа тырышты:

– Ишеткән юҡ та… Кереп булмаҫмы икән?

Ямғыр тымғансы бәхәсләшкәс, малайҙар шулай ҙа мәмерйәне тикшереп ҡарарға булдылар. Нисек ташлап китәһең инде – ауылда бер кемдең дә бында мәмерйә һынлы мәмерйә барлығы хаҡында һөйләгәне лә юҡ, ә улар үҙҙәре килеп юлыкты! Мәмерйәләр тураһында уларҙың уҡығаны ғына бар. Бәлки, уларҙы бында Шүлгәндәге кеүек мөғжизәләр көтәлер?

Ҡайын туҙының оҙаҡ янмаҫын белеп, улар эскә кем ниндәй ағас таба, шуны ташып өйә башланылар. Хатта ҡарағай сайыры ла табылды.

– Ҙур сыра эшләп булмаҫ. Беҙ былай ғына итәйек, – тип тәҡдим индерҙе Айнур. – Күҙ күрә алған ергә тиклем керәйек тә, шунда ҙур усаҡ тоҡандырырбыҙ. Ә унан һуң инде ҡарарбыҙ, ҡайҙа китәлер был ҡыуыш.

– Улайһа, мин дә керәм һеҙҙең менән, – ти һалды шунда Гөлнур. Алдан ҡорған план буйынса, малайҙар эскә кергәндә Гөлнур тышта ҡалып торорға тейеш ине.

– Шулай шул, тышта торҙоң ни ҙә, усаҡ янында торҙоң ни, – тип уны йөпләне Илнур.

Ун метрҙай эскәрәк яғылған ут мәмерйәнең әкренләп бейегәйә һәм киңәйә барыуын, ә иҙәненең түбәнгә китеүен күрһәтте. Шуға иҙәне ҡоро ахыры.

– Тәк, малайҙар, – тип аныҡ хәрәкәттәргә күсте Айнур. – Алгоритм беҙҙең былай буласаҡ: хәҙер тағы утын ташып, был усаҡты көсәйтәбеҙ ҙә, саҡ ҡына эскәрәк тағы берәүҙе яғабыҙ!

Был серле уйын балаларға оҡшап китте. Улар лагерҙан китеүҙәренә байтаҡ ваҡыт үтеүен дә, ҡорһаҡтары шаҡтай бушауын да тойманылар.



**(Дауамы бар.)**

# Наҙан булмау өсөн уҡый-яҙа белеү генә етмәй

Бәләкәй саҡта атайым менән балыҡҡа барғанда, һыуҙа йөҙөп йөрөгән балыҡтарға ҡарап, “Эх, балыҡтар кеүек йөҙөргә кәрәк ине” тип хыял итә торғайным. “Балыҡ кеүек йөҙгөң килһә, селбәрәһен йот”, – тигәйне бер саҡ атайым. Беҙ шуға ышанып, бер нисә балыҡ селбәрәһен йотоп, йылға ситендә һыу сәпелдәтеп ятҡан хәтерҙә ҡалған...



Боронғо гректарҙың: “Йә уҡый, йә йөҙә белмәйһең”, – тип әйтеүҙәре кеше бөтөнләй наҙан тигәнде аңлатҡан, ә Европала урта быуаттарҙа “балта кеүек” йөҙгәндәрҙе рыцарлыҡҡа алмағандар.

Ысынлап та, был шөғөлгә лә өйрәнергә кәрәк, сөнки төрлөсә йөҙөргә мөмкин. Кешеләр күптән инде йөҙөү алымдарын белә һәм беҙҙең көндәргәсә төп дүрт йөҙөү төрө айырылған:

1. Брасс (француз һүҙе brasse, йәки bras – ҡул), ябай телдә “тәлмәрйен кеүек” йөҙөү” – иң боронғо төрҙәрҙең береһе һәм спортта иң яй йөҙөү төрө иҫәпләнә. Иң беренсе донъя рекордтары ошо стилдә ҡуйылған. 1904 йылда брасс Олимпия уйындары программаһына индерелә. Беренсе ярыштарҙа спортсылар баштарын һыу өҫтөндә тоторға тырышҡан (“классик брасс”). Артабан ҙурыраҡ тиҙлек тә йөҙөү өсөн йөҙөүселәр һыу аҫтына сумып йөҙә башлаған, тик 1957 йылда “сумыу брассы” тыйыла.



2. Кроль (инглиз һүҙе crawl – шыуышыу) – һыуҙа иң тиҙ йөҙөү төрө, спортсыларҙың яратҡан стиле. “Ирекле” йөҙөү стиле буйынса ярыштар иғлан ителһә, күбеһенсә спортсылар “кроль” менән йөҙөргә тырыша, шуға ла “кроль” һәм “ирекле йөҙөү” синонимдар булып киткән. Профессиональ йөҙөүселәр был стиль менән XX быуат башында ярыша башлай.



3. Арҡала йөҙөү тәүҙән үк спорт стиле булып китмәй, ә һыуҙа яй ғына хәрәкәтләнеп ятыу, ял итеү өсөн ҡулланылған. Һуңғараҡ ярыштар программаһына индерелә, ләкин бында ла “брасс” йөҙөү техникаһы ҡулланылған – ҡулдарҙы һыу аҫтында ҡалдырып хәрәкәт иткәндәр. “Әйләндерелгән “кроль” ысулын хәтерләткән йөҙөү стиле беренсе тапҡыр 1912 йылда Олимпия уйындарында күрһәтелә.




4. Баттерфляй (инглиз һүҙе Butterfly – күбәләк) – иң ялҡытҡыс һәм техник яҡтан ауыр төр. 1935-1953 йылдарҙа үткән Олимпия уйындарында брасс стиле йөҙөүселәре һәм баттерфляй менән йөҙөүселәр бергә ярыша. 1953 йылдан баттерфляй үҙаллы йөҙөү стиле булып китә. Шулай итеп, баттерфляйҙың ҙур тиҙлектә йөҙөү төрө барлыҡҡа килә, ул “дельфин” тип атала – спортсы йөҙгәндә бөтә тәне менән тулҡын кеүек хәрәкәтләнә.



**Зәһит ӘБИЛЕВ.**

## Буласаҡ чемпион

Өфө спортсыһы, рапирасы Кирилл Личагин Сингапурҙа үтәсәк Йәштәр Олимпия уйындарында Рәсәй йыйылма командаһы составында ҡатнашасаҡ. 14-18 йәшлек спортсылар араһында был беренсе Олимпиада 14-26 августа үтәсәк. Унда 170 илдән 3200 спортсы ҡатнашасаҡ тип көтөлә. Уны үткәреү өсөн Мәскәү ҙә дәғүә иткәйне.

# Дыуан районы





58 процент майҙаны урмандар менән ҡапланған Дыуан районы Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында урынлашҡан. Район үҙәге – Мәсәғүт ауылы. Тәүҙә үҙәк ошо районда урынлашҡан Дыуан ауылында булған. Райондың 52 ауылында 31 мең кеше йәшәй.

Район гербының үҙәген зәңгәр фонда сабып барған алтын ат һыны тәшкил итә. Ул матурлыҡ, күркәмлек һәм юлдағы бар ҡаршылыҡтарҙы ла еңеү символы булып тора. Өҫкө өлөштә алтын ҡурай менән сатрашландырылған алтын башаҡ һәм тулҡындар өҫтөндә ике шыршы һүрәттәре. Ҡурай менән башаҡ берләшмәһе – халыҡтар дуҫлығын күрһәтә. Райондың ике төп йылғаһы – Әй менән Йүрүҙән һәм ҙур байлығы – ылыҫлы урмандар гербта шулай уҡ бер композицияға берләштерелгән. Улар шулай уҡ сафлыҡ, ихласлыҡ билдәләре лә.

2006 йылда ҡабул ителгән.

Авторы Салауат Ғиләжетдинов.



# ҺҮГЕНМӘ!..



Һүгенеүҙең үтә алама ғәҙәт икәнен бөтәһе лә яҡшы белә. Йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре лә, Ислам дине лә һүгенеүҙе тыя. Ҡөрьәндә: “Бер-берегеҙҙе төрлө ҡушаматтар, насар һүҙҙәр менән атамағыҙ”, – тиелә. Әрләшкән, насар һүҙҙәр әйткән кешеләрҙең баҡыйлыкта мотлаҡ яза аласаҡтары хаҡында ла иҫкәртелә. Шулай ҙа арабыҙҙа телмәрендә насар һүҙҙәрҙе ҡулланыусылар йыш осрай. “Мин һүгенмәйем, ә шулай һөйләшәм”, тиеүселәр ҙа бар хатта. Ундай кешеләргә уйланырға урын бар. Сөнки һүгенеү һүҙҙәре һаулыҡҡа етди зыян килтерергә һәләтле, тип һанай ғалимдар.








Нисек улай, тиһегеҙме? Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, ҡайһы бер урындарҙа, йәки өйҙәрҙә күңелгә рәхәт, тыныс, ә икенселәрендә шыҡһыҙ, хатта шомло. Махсус прибор ярҙамында шундай ерҙәрҙәге һыуҙы тикшереп ҡараған ғалимдар, ниндәй ҙә булһа фактор йоғонтоһона дусар ителгән һыуҙың төҙөлөше ныҡ үҙгәрә, тигән һығымтаға килгән. Насар уйҙарҙың, әрләү һүҙҙәренең һыуға бик насар тәьҫир итеүе асыҡланған. Үҙ сиратында, был тирә-яҡтың дөйөм торошона йоғонто яһай. Күрәһең, гел әрләш-талаш булған өйҙәрҙә, ниндәйҙер негатив энергия өҫтөнлөк иткән урындарҙа шуға ла йәм юҡтыр инде. Кеше организмы ла 70-80%-ҡа һыуҙан тора бит! Тимәк, бер-береһе менән әрләшкәндә, насар һүҙҙәр әйткәндә кешеләр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, һаулыҡтарын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Һүгенеү һүҙҙәренең тәьҫире шул тиклем көслө, хатта организмда генетик кимәлдәге үҙгәрештәр килеп сығыуы ла бар, тип һанай ғалимдар.

Үҙең һүгенмәгән хәлдә лә, әленән-әле эргә-тирәләге әхләкһеҙ кешеләр ауыҙынан насар һүҙҙәр ишетергә тура килә. Әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙең кире йоғонтоһонан нисек һаҡланырға һуң? Был осраҡта психологик алымдар ярҙам итә, ти ғалимдар. Әрләшергә яратҡан әңгәмәсе менән үҙең араһына күңелдән стена “ҡуйырға”, йәки “күҙгә күренмәҫ” көмбәҙ аҫтына йәшенергә була.

Матур йыр, доға, яғымлы телмәр, рәхмәт һүҙҙәре “ишеткән” һыуҙың төҙөлөшө лә яҡшы яҡҡа үҙгәрә икән. Тимәк, тормошобоҙ йәмле, үҙебеҙ һау-сәләмәт булайыҡ, тиһәк, бер-беребеҙгә ысын күңелдән әйтелгән йылы һүҙҙәрҙе, доғаларҙы йәлләмәҫкә кәрәк, дуҫтар. Юҡҡа ғына Ислам динендә “мосолман туғанығыҙға ихлас тойғоларығыҙҙы белдерергә теләһәгеҙ, уны яратҡанығыҙҙы, ихтирам иткәнегеҙҙе йәшермәгеҙ”, тиелмәгәндер.





**А. ҒӘБИҘУЛЛИНА әҙерләне.**

# Башваткыс

## Шырпылар

Һүрәттә 12 шырпынан дүртмөйөш һалынған. Уның майҙаны 9 шырпыға тиң: 3х3 шырпы. Хәҙер бер шырпыны ла һындырмай ғына һәм барыһын да файҙаланып, 4 шырпы (2х2 шырпы) майҙанлыҡ фигура төҙөгөҙ.



## Көҙгөләргә ҡараһаң...



Әгәр һеҙҙең өйөгөҙҙә ҙур көҙгө булһа, уның ярҙамында ябай ғына мөғжизә күрһәтә алаһығыҙ. Көҙгөнөң артынан ярты кәүҙәгеҙҙе генә сығарып, алда һәм саҡ ҡына ҡыяраҡ ҡарап торған кешегә күренәһегеҙ. Әлбиттә, ул һеҙҙең ҡалған яртығыҙҙы көҙгөлә күрәсәк һәм уға һеҙ тулы булып күренәсәкһегеҙ. Бер ҡулығыҙҙы күтәрһәгеҙ, уға ике ҡул да күтәреләсәк. Быныһын ул аңлар. Ә бына бер аяғығыҙҙы күтәреп ҡарағыҙ әле!..

## Дүрт йорт

Һеҙ күргән һүрәттә дүрт йорт төшөрөлгән. Улар төрлө заманда һалынған. Һеҙҙең бурыс – был йорттарҙы “йәшенә” ҡарап дөрөҫ урынлаштырып сығыу. Бының өсөн асҡыстар: 1. ишеге уңда булған йорт иң иҫкеһе түгел. 2. Ҡыйығында тәҙрә булған йорт ҡыйығында тәҙрәһеҙ йорттан һуңыраҡ һалынған. 3. Алты тәҙрәле йорт биш тәҙрәлеһенән боронғораҡ. 4. Ишеге уңдан булған йорт биш тәҙрәлеһенән һуңыраҡ һалынған.






## “Кәрәҙ”

1-ҙән 6-ға тиклем һандарҙы төрлө тәртиптә ҡара оялар тирәләй теҙеп сығығыҙ. Төп шарт: бер үк һандар йәнәш тура килергә тейеш түгел!

**Яуаптар:**

Шырпылар: алтышар шырпынан ике өсмөйөш эшләргә кәрәк.

“Дүрт йорт”: 3,5,7,1-се йорттар.

# КӨЛӘМӘСТӘР

* * *

Серәкәйҙәр үтә лә сәйер йән эйәләре икән. Барыбер бәреп үлтерәсәктәр йә ағыулаясактар икәнен белә тороп, ун икенсе ҡатҡа осоп мен дә, ҡолаҡ төбөндә безелдәй башла, имеш!..

* * *

Болдорҙа шахмат таҡтаһы артында бер малай менән эт фигураларға теклән ултыралар.

– О-о, – тип һоҡлана үтеп барыусы. – Ниндәй аҡыллы эт, хатта шахмат уйнай белә!

– Әллә ни аҡыллы түгел, – ти малай. – Иҫәп – бергә бер!

* * *

Үҫмер ҡыҙҙың әйткәне:

– Өләсәйемде яратам. Бер ул ғына мине иң ябығы тип һанай.

* * *

– Һеҙ был күлдәкте ҡайҙан алдығыҙ?

– Парижда тектергәйнем.

– Ә ул йыраҡтамы?

– Беҙҙән ун мең саҡырымдар барҙыр...

– Ҡара-ҡара, шундай төпкөл яҡ, ә матур тегә беләләр!..

* * *

– Йәш белгес тәжрибәлеһенән нимәһе менән айырыла?

– Йәш белгес нисек эшләргә белмәй, ә тәжрибәлеһе – нисек эшләмәҫкә икәнен белә.

**Тышлыҡта – Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.**


# АМАНАТ ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 07 (800), Июль, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәррирләт:
Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныклыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.
450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:
баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 277 - 74 - 80; компьютер бүлеге - 223 - 91 - 83
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:
г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала “АМАНАТ”
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО “УралСиб”,
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.07.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108/16 Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 11285. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0093.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

**Фотоға төштөк әле...**

Иғтибар: Өр-яңы конкурс!

# Ни булыр был?



Ижади уйлау белеү донъяла һәр кемгә, һәр эштә лә кәрәк. Рәссам-итекселәр түгел, ә итексе-рәссамдар ана шулай уйлай белгәндәрҙән сыға. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙерге тормошобоҙ беҙҙе әҙер алгоритмдар системаһы буйынса йәшәргә өйрәтә. Әкиәттә әйтелгәнсә: уңға китһәң – ..., ошо кнопкаға баҫһаң..., ошонда керһәң...

Ә эшкә ижади ҡарашты үҙеңдә көндәлек күнекмәләр ярҙамында ла үҫтерергә мөмкин. Данлыҡлы философ Карл Маркс әйтмешләй, барыһын да шик аҫтына ал да, үҙеңсә ҡарап ҡара. Шунда йә “ысынлап та, дөрөҫ икән дә” тигән, йә иһә “ай-һай...” тигән һығымталарға үҙең киләсәкһең. Ана шулай барлыҡҡа килә донъяға үҙеңсә ҡараш.

Һеҙҙе был күнекмәгә ылыҡтырыр өсөн, беҙ ябай ғына бер юл тәҡдим итәбеҙ. Ижади юл ул. Бына был фото интернет селтәрендә “Көн фотоһы” конкурсында еңеп сыҡҡайны. Ул бер көн буйы эленеп тора һәм теләгән кеше уға үҙ аңлатмаһын бирә. Миҫал өсөн унан алынған өҙөктәрҙе килтереп китәбеҙ.

Ә һеҙҙең бурыс – ошо фотоға үҙегеҙҙең аңлатмағыҙҙы биреү. Тотош хикәйә яҙаһығыҙмы, “һм-м...” тип кенә ҡуяһығыҙмы – үҙегеҙ ҡарағыҙ инде. Беҙ уларҙы оҙонлоғо йә ҡыҫҡалығы буйынса түгел, ә үҙенсәлекле булыуына ҡарап билдәләйәсәкбеҙ. Һәр еңеүсегә “Аманат”тың иҫтә лекле бүләктәре тапшырыласаҡ.

## Өлгөләр:

“Урмандарҙы ас туристарҙан һаҡлағыҙ!”

“Кәмәләгеләр йәл – үҙҙәрен ни көткәнен улар белмәй әле...”

“Буласаҡ түңгәктең фотоһы был!”

“Ҡондоҙҙар урмандарҙы ҡоротҡос туристар менән ана шулай көрәшә”

“Ағас кимереү – еңел эш түгел!..”

“Плакат бит был фото! Ҡондоҙ үлтерәһең дә – планетаны ҡотҡараһың, тип ҡысҡыра был фотоның һәр пикселе...”

“Хәсрәт туристар – мөһим эштән айырҙылар...”

“Ана шулай йыл һайын: беҙ быуаға тип ағас йығабыҙ, ә уларға – ҡоро утын!”

Яуаптарҙы ябай хат, “электронка”, йә СМС-хәбәр аша ебәрергә мөмкин.

Аманат, № 07, 2010 йыл

## Минең республикам!

**Ҡәҙерле балалар! “Минең республикам” конкурсы дауам итә.**

**Был һанда Мәсетле районы Яуыш мәктәбе уҡыусыларының ижади эштәрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

1. **“Тыуған төйәгем”.** Алһыу Усманова.
2. **“Көҙгө уңыш”.** Рузанна Нурыева.
3. **“Башҡортостан ҡырҙарында”.** Рәмзилә Вәхитова.
4. **“Ҡымыҙ бешеүселәр”.** Нәзир Кәримов.
5. **“Бесәндә”.** Шамил Әбделмәнов.
6. **“Республикам иртәһе”.** Нәркәс Рәхимова.
7. **“Ағас ултыртабыҙ”.** Әҙилә Әбделмәнова.













РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ










Журналдың индексы – 73317